*Мәрйәм БУРАҠАЕВА*

# ОЛО ЭЙЕК ҠЫҘЫ*

**Үткәндәргә ҡайтҡы килә...**

“Арғымаҡ” тип аталған әҙәби-публицистик әҫәремдә оло йөрәкле кеше, һүҙ тылсымын тәрән тойоусы һәм оҫта ҡулланыусы һәләтле әҙибә, иҫ китмәле илһөйәр Зәйнәб апай Биишеваның хаттарын ҡыҫҡартып телгә алып киткәйнем. Зәйнәб апай тураһында мотлаҡ иҫтәлектәр яҙырмын, тигән хыялым бар ине. Арттырып та, шаштырып та әйтелгән һүҙ түгел: Зәйнәб апайҙың ғүмеренең һуңғы йылдарында байтаҡ арауыҡта (Ейәнсураға күсеп ҡайтҡанға тиклем) сер һөйләр кешеһе булдым.

“Был йәшемдә эргәмдә һинең булыуың минең өсөн оло йыуаныс, һылыу. Йәш саҡта көнө төнгә, йылы йылға ялғанып ғүмер үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Бөтөн маҡсатым — аҙ ғына ваҡыт арттырып, яҙыу-һыҙыу эшенә тотоноу ине. Ә хәҙер уйландыра, һыҙландыра. Бигерәк тә Ғәзиз ағайың киткәс (Зәйнәб апайҙың ире Ғәзиз Әминев 1977 йылда вафат булды), ауыр уйлар баҫа (Зәйнәб апай минең менән һәр ваҡыт Эйек буйы һөйләшенсә аралашты. Үҙебеҙсә һөйләшһәм, бала сағыма, туғандарым янына ҡайтҡандай булам, ти ине). Ғәзиз ағайың һине яҡын күрҙе бит. Шуғалыр ҙа, һин янымда булғанда, бына-бына эш бүлмәмә ул килеп инер ҙә, ихлас йылмайып, һинең менән күрешер, шунан балаларса эскерһеҙ генә ҡарашын минең яҡҡа бороп, мин дә ултырайыммы, тип, эйәк ҡаҡҡанымды көтөп торор һымаҡ өмөтләнәмсе... Эй, кеше күңеле ҡыҙыҡ та инде... Тик, һылыу, апай мине яҡын күрә, тип береһенә лә әйтмә, араға төшөрләр... Һиңә һөйләр серләрем күп әле минең. Беләм, һинән сыҡмай ҙа ул... Ә шулай ҙа:

Дуҫыңдың да дуҫы була,
Ул да һөйләр дуҫына, —

тип йырлайлар бит.

Мин һиңә нык ышанам, һылыу. Һин сабыр холоҡлоһоң, ә мин яндырай ул, ҡапыл янып-тоҡанып киткән саҡларым, күңелемде өйкәп йөрөгән әрнеүләремде әйтмәҫ серләрем менән ҡуша ысҡындырғылап ебәргән саҡларым да булғылай. Ә аҙ ғына ярамағанраҡ һүҙ ысҡындымы, уға аламалыҡ йәбешергә генә тора. Бәләкәй саҡта малайлар дегәнәк башларын бер-береһенә йәбештереп, ҙур итеп туп яһай торғайнылар. Шуның һымаҡ... Ундай тупты бәрһәләр, ауырттырыуын бик ауырттырмаһа ла, йәбешә, төшмәй ыҙалата әле ул”, — ти торғайны.

Берәй нәмәгә яңылыш үпкәләп, үҙе әйткәнсә, ҡыҙыулығы менән самаһыҙыраҡ һүҙ ысҡындырып ебәргән саҡтарында тыныс ҡына тыңлап тора ла, аҙаҡ, ул тынысланғас, асыҡлыҡ индерә торғайным. “И-и-и, һылыуымды... Утты ут менән

---

* Яҙыусы Зәйнәб Биишева тураһында хәтирәләрем.

һүндермәйләр шул, һыу кәрәк уға. Йәш булһаң да, шуны беләһең. Әл дә һин сабырлыһың, һин аңлайһың минең холҡомдо”, — тип ҡыуана ине. Шуға ла беҙҙең дуҫлыҡ оҙаҡҡа һуҙылды. Мин ғаиләм менән Ейәнсура районына ҡайтып киткәс, ул тыуған яҡтарында өй һалып биреүҙәренән бөтөнләй төңөлдө лә оҙайлы ваҡытҡа Мәскәүгә күсте.

Иҫәнғолда саҡта телефон аша йышыраҡ аралаштыҡ. “Һылыу, бик һағынам. Хат яҙғанға ҡарағанда үҙ тауышыңды ишетеп, һөйләшеү яҡшыраҡ булыр”, — ти ине. Мин эштән ҡайтып, йортта ул-был иткәндән һуң, киске сәғәт 10-да, Мәскәүҙә ул саҡта сәғәт 8 була, иркенләп һөйләшеп ала торғайныҡ.

Ғаиләбеҙҙе яҡын күрҙе Зәйнәб апай. “Әл дә һеҙ бар әле. Һеҙҙең менән генә ҡурҡмай-өркмәй ихлас һөйләшәм бит мин. Башҡалар өсөн мин бары тик яҙыусы Зәйнәб Биишева ғынамын”, — тип йыш ҡына ҡабатлай торғайны.

Диҡкәтте ул Мәскәүҙән үк, унда уҡыған уландарының береһе — Юлай аша белгән һәм аҙаҡ инде, Өфөгә эшкә ҡайтҡас, күрешә-иҫәнләшә, матбуғат биттәре аша ишетә йөрөгән һәм, беҙ ғаилә ҡорғас, яҡындан аралаша башланыҡ. Зәйнәб апай бик ятатты Диҡкәтте. Уның үлемен үҙ ҡайғыһындай ҡабул итте.

“Ҡәҙерле Мәрйәм һылыу!

Көтөлмәгән ҡара ҡайғы емерелеп төштө өҫтөбөҙгә. Диҡкәтте — оло йөрәкле, бай күңелле, ысын кешене юғалттыҡ. Ауыр, беҙгә ауыр. Ә һиңә уның ауырлығы күтәргеһеҙ. Ҡайғыңды еңеләйтер әмәлем юҡ. Тик бергә ҡайғырыша ғына алам. Бирешмәҫкә тырыш, һылыу. Балалар хаҡына ныҡ бул. Шундай саҡта янында ла була алмайым бит. Температура менән ятам (38—38,5°) Диҡкәттең матур-матур балаларына ҡарап күңелеңә көс ал, һылыу. Апайың Зәйнәб”.


28.IX.81.
Ҡәҙерле Мәрйәм һылыу!
Көтөлмәгән ҡара ҡайғы емерелеп төштө өҫтөбөҙгә. Диҡкәтте — оло йөрәкле бай күңелле кешене юғалттыҡ. Ауыр, беҙгә ауыр. Ә һиңә уның ауырлығы күтәргеһеҙ. Ҡайғыңды еңеләйтер әмәлем юҡ. Тик бергә ҡайғыра ғына алам. Бирешмәҫкә тырыш, һылыу. Балалар хаҡына ныҡ бул. Шундай саҡта янында ла була алмайым бит. Температура м-н ятам (38, 38,5°) Диҡкәттең матур-матур балаларына ҡарап күңелеңә көс ал, һылыу. Апайың Зәйнәб.

Зәйнәб апай атайымдың үлем хәбәренә лә битараф ҡалманы.

“Ҡәҙерле Мәрйәм һылыу!

Бөгөн, газетала уҡып, һинең өҫкә тағы ҡайғы ябырылыуын белеп, йөрәгем һыҙланы. Хат аша булһа ла ҡайғыңды уртаҡлашайым, тим. Был фани донъя шулай ҡайғы менән шатлыҡтың алмаш-тилмәш килеп, үтеп тороуынан ғибәрәттер инде ул... Бирешмә, һылыу!

Сәләм һәм изге теләктәр менән Зәйнәб апайың”. (Ҡултамға).

Әлбиттә, мин хәтирәләремдә Зәйнәб апайҙың серҙәрен асырға йыйынмайым, әммә уның әҙәбиәттә генә түгел, ә көнкүрештә лә ни тиклем батыр, ығы-зығыларҙан күҙ күреме юғарылыҡта өҫтөн булыуын күрһәтерлек ваҡиғаларға туҡтармын, тип уйлайым. Сөнки уның көнкүреш батырлығы булмаһа, әҫәрҙәре менән бөтөн илебеҙҙе яулап алырҙай яҙыусы кимәленә күтәрелә алмаҫ ине.

Зәйнәб апайҙың миңә яҙған хаттарын яҙылыу тәртибе менән түгел, ә йөкмәткеһе яғынан ҡарап урынлаштырам. Шуның өсөн яҙылыу ваҡыты бер-бер артлы тура килмәүе ихтимал. Үҙ ҡулы менән яҙғандарын, уның яҙыуын


14 ноябрь 1982 йыл.

Ҡәҙерле Мәрйәм һылыу!

Бөгөн, газетанан уҡып, һинең өҫкә тағы бер ҡайғы ябырылыуын белеп, йөрәгем һыҙланы. Хат аша булһа ла ҡайғыңды уртаҡлашайым тинем. Был Фани донъя-"дон"ья шулай ҡайғы менән шатлыҡтың алмаш-тилмәш килеп-үтеп тороуынан ғибәрәттер инде ул... Бирешмә, һылыу!

Сәләм һәм изге теләктәр менән Зәйнәб апайың.

г. УФА – 92
БАТЫРСКАЯ, 6
кв. 59
БУРАКАЕВЫМ.

аңламаусылар ҙа булыр, тип уйлап, өлөшләтә күсерҙем. Әммә бер генә һүҙен дә үҙгәртмәнем.

Хикәйәләремде беренсе тапҡыр Яҙыусылар союзының йәштәр менән эшләү секцияһында тикшергәндән һуң, яҙыусы Фәрит Иҫәнғолов: “Ҡатын-ҡыҙға яҙыусы булып китеү еңел түгел. Шуның өсөн ҡыҙҙар, әҙәбиәткә күпләп килһәләр ҙә, берәм-һәрәм тороп ҡалалар. Донъя мәшәҡәттәренән арынып, яҙыуға ваҡыт ҡалдырыу өсөн йә Зәйнәб апай һымаҡ — уҫал булыу, йә Фәүзиә апай һымаҡ — өндәшмәй генә үҙ эшеңде эшләү, йә Кәтибә апай кеүек азат булырға кәрәк”, – тигәйне. Яҙыусылыҡ менән уҫаллыҡтың бер генә лә уртаҡлығын күрмәгәйнем ул саҡта. Тора-бара ғына аңлашылды. Уҫаллыҡ ҡына түгел, көнкүреш батырлығы ла бик кәрәк икән яҙыусы ҡатын-ҡыҙға. Ә уҫаллыҡ бер таянысы ла булмаған Зәйнәб апайҙың үҙен-үҙе һаҡлап-ҡурсалап йөрөтөү ысулы – ҡалҡаны булған. “Ҡалҡан” һәр саҡ кәрәк булып торҙо уға. Ул хаҡта артабан яҙылыр.

* * *

Кешенең эске донъяһы сәйәхәттә, тәбиғәттә, төнгө усаҡ янында, оҙон юлдар үткән саҡтағы әңгәмәлә, төндәрен ҡала йәки ауыл урамдары буйлап һөйләшеп йөрөгәндә ныҡ асыла. Зәйнәб апай менән Күгәрсен һәм Ейәнсура райондарына ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа дүрт тапҡыр сәйәхәт ҡылдыҡ. Ошо ваҡыт эсендәге әңгәмәләр, дөрөҫөрәге, апайҙың ихлас асылып китеп һөйләгәндәре үҙ тауышы, ҡиәфәте, берсә моңһоу-һағышлы-уйсан, берсә тотош йөҙөн балҡытып ебәргән нурлы ҡарашы менән күңелемә нисек уйылып ҡалған – шулай һаҡлана. Бөгөн мин тап бергәләп сәйәхәткә сыҡҡандағы Зәйнәб апай йәшендәмен, һәм уның һөйләгәндәрен — унынса аңлап, уның кисергәндәрен — уныңса тойоп, ул саҡта сәйерерәк күренгән, төрлө һорауҙар тыуҙырған хәтерләүҙәрен бөгөнгө йәшемдә уның йәштәше, тиңдәше булып йөрәгем аша үткәреп яҙа алам.

Беҙ райондарыбыҙҙа 1978—1979 йылдарҙа — берәр көнлөк, 1979—1980 йылдарҙа өс-дүрт көнлөк оҙайлыраҡ сәйәхәттә булдыҡ. Зәйнәб апайға етмеш, етмеш бер—етмеш ике йәштәр, ә миңә утыҙ биш, утыҙ алты—утыҙ ете йәш ине.

Бөгөнгө йәшемдән сығып аңлайым: Зәйнәб апай ауылын, тәбиғәтен, Оло Эйеген, ҡырсын ташлы яр буйҙарын бала сағында ла, үҫмер ваҡытында ла, аҙаҡ та күреп-һоҡланып-һөйөнөп туя алмаған, тыуған яҡтарынан иртә айырылған һәм һәр ваҡыт танһыҡлаған, һыуға сарсаған кешеләй ашҡынып-ярһып ҡайтҡан. Әммә рәсми ҡаршылауҙар, рәсми оҙатып йөрөүҙәр, рәсми осрашыуҙар ғына сарсап һағыныуын ҡандыра алмаған. Өҫтәүенә, рәсми осрашыуҙарҙа, нигеҙҙә, бер төрлөлөк, хатта ҡайһы бер осраҡтарҙа яһалмалылыҡ өҫтөнлөк итә. Ә Зәйнәб апайҙың күңеле шул тиклем һиҙгер ине, аҙ ғына яһалмалылыҡты ла тойоп ала ла, күңеле төшә лә ҡуя торғайны. Хәл иткес мәсьәләлә тураһын бәреп әйтеп ебәрһә лә, район етәкселәре алдында ҡаршы алыу рәсмилелегенең күп осраҡта яһалма булыуын тойһа ла, өндәшмәй, әҙәплелек һаҡлай торғайны.

Зәйнәб Биишеваның тыуған яғына рәсми рәүештә түгел, ә халыҡ менән ихлас осрашыуҙарға ҡайтҡыһы килде. Сәхнәлә, өҫтәл артында ултырып түгел, ауылдаштары менән ҡул бирешеп күрешеп, йөҙгә-йөҙ, күҙгә-күҙ ҡарашып, яҡташтары менән Оло Эйек буйындағыса һөйләшеп, ауылдаштарының — роман геройҙарының хәлен белешеп йөрөгөһө килде. Шуның өсөн һәр һөйләшеүҙә, Мәскәүҙән яҙған хаттарында: "Һылыу, икәүҙән-икәү генә ҡайтайыҡ әле, икәү генә һөйләшеп йөрөйөк әле", — тигән теләк белдерә торғайны. Форсат табып сәйәхәткә сыҡҡан саҡта, ялан-болондарҙы буйлағанда, Оло Эйек йылғаһын кискәндә, һыуһаҫар туғайҙар аша үткәндә ете тиҫтәне ауҙарғанын онотоп ебәрә ине шикелле. Йәшеңде онотоу-онотолоу, тәбиғәттең теге йәки был күркәмһеҙерәк урынында ла (минең ҡарашҡа) өндәшмәй генә уйҙарға бирелеп тороу йәки үҙ йәшеңдән йәшерәк күренге килеү (ауылдаш өлкән инәйҙәр менән осрашҡанда) кеүек сәйер күренештәрҙе хәҙер уның йәше юғарылығынан сығып ҡарайым һәм аңлайым. Ә ул саҡта...

— Зәйнәб апай, һалҡын алдыраһың, төшмә йылғаға, — тип туҡтатмаҡсы булам.

Ә ул аяғындағы еңел танкеткаһын сисә лә, Эйектең ваҡ ҡына ҡырсын ташлы һай еренән һыу кисеп, кинәнеп атлай башлай, үҙе:

— Эйегем дә, минең кеүек, Зәйнәб ҡыҙын һағынғандыр ул, һылыу. Моғайын, өшөтмәҫтер, — тип йылмая.

— Бынан шырлыҡ бит, Зәйнәб апай, әйҙә урабыраҡ үтәйек, — тим Ай-һай Мөрсәләйҙән Туйөмбәткә йәйәү килгәндә.

— Тегендә йырын тәрән тип ураттырҙың, бында шырлыҡ тип... Ҡискә лә барып етеп булмаҫ улай булһа. Шырлыҡ булһа ла ошонан атлайыҡ. Шырлыҡтан йөрөмәгән кешеме ни мин? — тип, малын алып ҡайтҡан кешеләр генә һалған берләм юл буйлап атлап китә.

— Зәйнәб апай, йылға буйында ер һалҡыныраҡ, ел дә... Әйҙә, тегендәрәк, ышыҡҡараҡ ултырайыҡ.

— Юҡ, һылыу, ошолайтып йөрөргә насип булһа, Эйегемдең ярына аяҡларымды һәлендереп ултырып бер йырлармын, тигән хыялым әле лә ташламаған. Ултыр эргәмә. Апайыңды тыңла.

Зәйнәб апай хыялын тормошҡа ашырҙы бер килеүебеҙҙә: яр башына ултырып, ғәжәп моңло тауыш менән "Сәлимәкәй"ҙе һуҙҙы ла:

Илап тыуһам да, мин йырлап үҫтем,
Йырлап йәшәйем әле бөгөн дә,
Сәсләремә ҡырау сәселһә лә,
Ҡырау ҡунмаҫ минең күңелгә...
"Зәйнәб Биишева әйтмешләй", —

тип тамамлап ҡуйҙы. Зәйнәб апайҙың шундай үҙенсәлекле сифаты бар ине — үҙ ижадынан өҙөктәр килтерһә, йылмайыбыраҡ ҡына: "Зәйнәб Биишева әйтмешләй", — тип ослай торғайны фекерен.

Яҙыусының йөрәк ярһыуҙарын, күңелдәре нескәреп китеп, күҙҙәренә йәш алыуҙарын, "Һай-й, йәмле лә йәмле шул Оло Эйек буйҙары!" — тип, тирә-яғын байҡап тороуҙарын, йөрәгенең иң түренән тулғандырып-тулҡынландырып сыҡҡан моң менән көй һуҙыуҙарын әлеге йәшемдә, әйтеп үтеүемсә, тәрәнерәк һәм икенсерәк аңлайым, әлбиттә. Уның ғәжәп моңло йырҙары, ҙур һағыш тулы ҡап-ҡара күҙҙәрендә һис кенә лә йәшереп булмаҫлыҡ йәш тамсыларының ялтлап ҡалыуы, илап ебәрмәҫ өсөн күҙҙәрен сырт-сырт йомғолап алыуы, "Һылыу, әйҙә әле бынау серле төндә

йоҡлап ятмайыҡ, ауыл урамдарынан үтәйек, күптән-күптән һағынып йөрөйөм тыуған яҡларымды”, — тип, ҡапыл урамға йыйына башлауы әйтеп бөтөлмәгән һәм бер ҡасан да әйтелмәйәсәк әллә күпме сере ҡалғанлығын аңлата ине.

“Үҙебеҙҙең яҡтың төнләре лә яҡын шул күңелгә. Ҡандай сафлыҡ, ҡандай хозурлыҡ! Элек тә төн тынлығын тыңларға, төнгө Эйектең уйсан ғына ағып ятҡанын, тулҡынларҙың ай нурында рәхәтләнеп ҡойонғанын күҙәтергә ярата торғайным. Үҙемсә мөһабәт тойолған таулары, Оло Эйектең тын ғына ағып ятыуы һоҡландыра ине... Ә хәҙер тик моңһоу уйлар ғына уята улар...

Үтеп кенә барған был ғүмерҙе
Туҡтатырлыҡ әмәл бар микән?

Әл дә һин бар, һылыу. Кем янында мин ошолайтып, хисләремә ирек ҡуйып ултыра алыр инем?! Алманым да. Хафаса апайымдың үҙ ҡайғыһы үҙенә, зәғифлеге арҡаһында ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп йәшәй алманы, Ғәзиземдең ғүмерен әйтеп кенә торорға ла түгел инде, ҡандай бәһлеүән ир уҙаманын ғәриплəп ҡайтарҙы был һуғыш. Ағайыңа мин бер ваҡытта ла борсолоуларҙы ла, ҡайһы бер бөйөкләрҙең, бөйөкләр һүҙенән сыға алмаған етәкселәрҙең дә миңә ҡарата мөнәсәбәтен дә һиҙҙермәнем. Уланларым алдында мин бер ваҡытта ла көсһөҙлөк, аптыранып ҡалыу кеүек мәлләремде күрһәтмәнем, былай ҙа бөтөн ышаныслары мин булдым. Әгәр арҡа һөйәр таяныслары ла серек булып сыҡһа, улар ни эшләр, кемгә ышаныр, кемгә өмөт бағлар, тип уйланым. Япа-яңғыҙ ҡалған саҡларымда инде үҙ күңелем ҡараңғылығына юл алырға, бошонҡо уйларға бирелергә теләмәнем... Ә кеше фиғеле ҡатмарлы, кемгәлер һөйләп, тынғылыҡ бирмәй йөрәген өйкәп торған уй-тойғоларын сығарып алырға кәрәк уға. Улай итмәгәндә, йөрәкте һары ала, тигән булырҙар ине ауыл инәйләре.

Һәр кемдә лә бер хәсрәт
Була торғандыр инде, —

тигәндәй, уйлаһаң, уйылып китерлекләре бар миндә лә. Етемлек әрһеҙлегенәнме, үҙем шулай беше булдыммы — ауырлыҡлар мине һындырманы, сыныҡтыра ғына барҙы. Ҡаршылыҡ булмаһа, кеше нисек сыныҡһын? Шуға кәртә ҡуйыусы “дуҫтар”ға рәхмәтлемен дә ул мин... Һылыу, бер үҙем бит. Япа-яңғыҙым тауҙай хеҙмәт һалдым, бер үҙем ғаилә йөгөн йөкмәнем. Уның араһында бөйөкләр менән көрәш. Шул ығы-зығы, көрәшкә киткән көсөмдө халҡыма хеҙмәткә сарыф итһәм, ижад тауым дүрт-биш мәртәбә бейегерәк булыр ине. Ығы-зығы көстө күп ала. Яҙған әҫәрләремдең береһе лә ҡаршылыҡһыҙ донъя күрмәй. Тетмәһен генә тетәләр. Белгәне лә, белмәгәне лә. Хатта яҡын күреп, ярҙам итеп ебәргән ҡустыларҙы ла ҡаршы ҡуялар. Имеш, “Биишева наҙан — уны әҙәбиәткә яҡын йөрөтмәгеҙ, беҙҙең ғалим яҙыусыларыбыҙ бар”, “Биишева романсы түгел”, “Биишева шағир түгел”, “Биишева драматург түгел...” Ни эшләп, улай булғас, халыҡ уҡый?! Кем һуң улай булғас мин? Ни эшләп шиғырларым донъя күреүе була — йә йырға әйләнеп ҡанатлана, йә телдән төшөрмәй ятҡа бикләй башлайлар? Шул уҡ бөйөк ижадсылар айырым юлларын ботарлап, афоризмға әйләндерәләр, үҙҙәренең әҫәрләренә исем итеп ҡуялар? Халыҡтан алдыҡ, тигән булалар. Халҡыбыҙ ҙур, төрлө ырыуларҙан тупланған, ғәҙәттәре лә, йолалары ла бай, күп төрлө. Әйҙә, өйрән, ялҡауланма, ысынлап та халыҡтан йый, башҡа халыҡларҙыҡын үҙләштермә, әҙер әҫәрләрҙе файҙаланма. Күпме байлығыбыҙ ята сиҙәм һымаҡ аҡтарылмай! Күпме хазина! Һәр йылға буйы башҡортоноң үҙ ғәҙәте, үҙ йолаһы, үҙ һөйләше. Шуны өйрәнергә лә тупларға кәрәк. Ә әҙерҙе күсереп түгел. Дим буйы инәйләренең булмышы, һөйләше

ни эшләп Эйек инәйләренеке кеүек булһын? Минең әҫәрләремдә тикшергән протоколларҙы уҡыһаң, иҫең-аҡылың китер. Хатта бит, һылыу, “сәйер” һүҙен аңламайынса, әҫәремдең исеменә тиклем бәйләнделәр... Һүҙлектә юҡ ундай һүҙ, тиҙәр. Булмаһа, булыр, халыҡта бар, халыҡта булғас, һүҙлектә лә булыр ул һүҙ, тип, үҙгәртмәнем.

Мин бирешмәйем, һылыу. Минең ҡаҡшамаҫ ныҡлы таянысым — халҡым бар. Халыҡ — ҙур көс. Халҡым бар, тип бөтәһе лә әйтә ала, әлбиттә. Тик, улай тип әйтеү өсөн халҡыңды бик яҡшы белергә, аңларға, уның күңеле менән йәшәргә, уның тын алышын тойорға кәрәк. Халыҡтың тын алышын тойоу, халыҡ менән бер уйҙа булыу бөтөн яҙыусыға ла бирелмәгән. Өҫтөн-мөҫтөн генә тел белеү һине халыҡтыҡы итмәй, уның диңгеҙҙәй тәрән күңелен, ҡаялай ғорур йөрәген аңларға кәрәк. Ошондай тойоу һине тамырлы ла, ҡанатлы ла итә. Ә телен, ижадын, йыр-моңон белмәгәс, аңламағас, халҡым, тип нисек әйтә алаһың?! Үҙен аңлағанды, үҙенсә уйлай-фекерләй белгәнде генә халыҡ үҙенеке итә. Вазифалы бөйөкләрҙең маҡтауы ла, миҙаллары ла кәрәкмәй миңә. Миҙалды хәситә итеп тағаһыңмы? Әйҙә, ҡыҙыҡҡан кеше таҡһын. Ялтырауыҡҡа ҡыҙыҡҡан бала-саға һымаҡ. Беҙҙә бит исемде яулап түгел, даулап ала башланылар хәҙер. Ундай ялтырауыҡ даулау өсөн күпме әрһеҙлек кәрәк? Ә бер уйлаһаң, әрһеҙ булыу, эшеңдән алда үҙеңде күрһәтә белеү ҙә талантлыр ул. Ә миңә ундай талант тәбиғәттән бирелмәгән. Орденлар, һәр төрлө исемләр хеҙмәтеңә ҡарап бирелһә, тауҙай хеҙмәтем эргәһендә күбәләй өйөлөп ялтырауыҡлар ятыр ине, шулай бит, һылыу? Халыҡ баһаһы — иң юғарыһы. Толстой, Горький, Аҡмулла, Бабичларҙың исеме лә юҡ, ордены ла. Улар үҙҙәре йондоҙ”.

Зәйнәб апай Мәскәүҙән яҙған хаттарында ла ошондай фекерҙәр үткәрә һәм, тиҙерәк профессиональ яҙыусы булырға кәрәк һиңә, ваҡ-төйәккә ваҡытың сарыф ителмәҫ ине, ти торғайны. “Халыҡ араһында күберәк булып, өлкәндәр менән аралашып, тел байлығын йыйырға ине, телебеҙ һутһыҙлана, алтындай ҡиммәтле һүҙҙәребеҙ юғала бара бит. Һүҙе юғалғас, төшөнсәһе лә юғала инде, төшөнсәһе юғалғас, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәтенә лә хилафлыҡ килә. Бына бит телдең ҡөҙрәте ҡайҙа ул! Шул “сәйер” һүҙен алмаштыра алырлыҡ, тап шул төшөнсәне бирерлек һүҙ бармы? Әйтегеҙ, алмаштырам, тинем. “Ҡыҙыҡ” тигән була береһе. “Сәйер” ни эшләп ҡыҙыҡ булһын! Мин ҡыҙыҡ кеше тураһында яҙманым, сәйер кеше тураһында яҙҙым, тип ҡырталаштым...”

Газета-журналдарҙағы мәҡәләләргә, әҙәби әҫәрҙәргә ҡарата һәр ваҡыт үҙ фекерен белдерә барҙы Зәйнәп апай: йә телефондан шылтыратып әйтте, йә хат яҙҙы. Нисек өлгөргәндер? Ә бит ул, оҡшаны-оҡшаманы, тип кенә түгел, тотош анализ биреп яҙа торғайны. Мәҡәлә авторының үҙенә лә яҙып ебәрә ине. Йәштәрҙең, башлап яҙыусыларҙың әҫәрҙәренә айырыуса иғтибарлы булды, теле бай ижадсылар өсөн ҡыуана, уларҙың әҫәрҙәрен кинәнеп уҡый торғайны.

* * *

Тыуған халҡы менән тыуған телен Зәйнәб апай һымаҡ тәрән яратҡан кешеләр һирәк булалыр. Ни генә эшләмәһен, ни генә уйламаһын — һәр ваҡыт халҡы яҙмышы менән бәйләп, уның өсөн ниндәйҙер яҡшылыҡ эшләү, уны данлау, донъя кимәленә сығарыу фекере алдан йөрөнө. Хаттарынан да был асыҡ күренә. Хатта Диҡҡәттең вафатынан һуң балаларҙы артабан уҡытыу, уларға һөнәр һайлау йүнәлешендәге кәңәшендә лә Илгизәрҙе, бәлки, умартасы итерһең дә, башҡорт балы данын донъя кимәленә күтәреү йүнәлешендә эшләр, тигән фекере бар.

“Башҡорттоң донъя кимәленә күтәрерлек һөнәрҙәре, оҫталығы ғәжәп күп бит ул, һылыу. Борон бит башҡорт бер генә нәмәне лә һатып алмаған, бөтөнөһөн дә үҙе етештергән, үҙе уйлап тапҡан. Шуларҙы өйрәнһендәр ине йәштәр. Башымда уй-фекерләрем ҡайнап-ташып бара, тик мөмкинлегем сикле, барыһын да яҙа алмайым. Йәш саҡта бер сәғәттә эшләнелә торған эш хәҙер айҙарға һуҙыла. Әллә ялҡаулыҡ, әллә ҡартлыҡ. Дәрт бар, дарман самалы.

Ҡандай матур итеп тире иләй, күн эшкәртә, кейеҙ баҫа торғайнылар. Хәҙер халыҡ та ялҡауланды шикелле. Ирҙәр нығыраҡ ялҡауланды, һылыу. Күҙәтеп йөрөйөм: ҡатын-ҡыҙ әрһеҙерәк, һөнәрен онотмай бит, еңелгә һалышмай. Шәлен бәйләй, ҡоротон ҡайната, бишбармағын бешерә, ҡаҙылығын яһай, тултырмаһын тултыра, күбекмайын да, ҡымыҙын да бешә. Ә ирҙәр хатта башҡорт тоҡомло аттарҙы ла юғалтып бара... Инде бына башҡорт балын сит-яттарға ҡалдырмаһындар ине...”

Диҡҡәттең вафатынан һуң аҡса яғынан ҡытлыҡ кисергән саҡта, бер йылға балаларым менән Күгәрсен районының Сәйетҡол ауылына уҡытырға ҡайттым. Әлбиттә, форсаттан файҙаланып, мәктәп, ауыл тормошон да өйрәндем. Шул саҡта Зәйнәб апай: “Һылыу, ауылда өй алып төпләнһәң, мин дә ҡайтайыммы икән? Айырым өй алыпмы, бергәме, минең дә бит ауылда йәшәгем килә. Нисек уйлайһың?” — тип ҡуйғылай ине. Һәр хәлдә, ауылға ҡайтып йәшәргә бик теләй ине ул. Ауылының “перспективаһыҙҙар” исемлегенә индерелгәнен белгәс, төн йоҡламай уфтанып сыҡты. Ул хаҡта яҙылыр. Мин уның ауылды һағынып өҙгөләнеүен, әммә бер кемдең дә уның зарына артыҡ иҫе китмәүен күрә йөрөгәс, зиһенгә һалып ҡуйҙым: көсөмхәлем бар саҡта ауылда нигеҙ ҡорорға кәрәк.


2.III. 84
Мәскәү.

Мәрйәм һылыу !

Һиңә күптән түгел генә хат яҙғайным да, бөгөн тағы яҙырға ултырҙым әле. Бөтә март буйы, йөрәк приступы менән яфалана- яфалана, теге поэманы тағы бер ҡат ҡарап, төҙәтеп, машинкала тағы баҫып эшен бөтөрҙөм дә, бөгөн йән тынслап ултырам, тип әйтергә мөмкин. Бер- ни уйламай, тыныс ҡына йәшәге килә. Әммә баш бит күрәһең, туктауһыҙ эшләү өсөн бирелгән ?! Уйлай, ҡыуана, илрәй, һыктай... Ярай, уның эше шул. Әле уйым һиңә, һинең балаларҙың артабанғы яҙмышына, һинең ижад тормошоңа барып төртөлдө! Һәм башыма килгән бер фекеремде һиңә яҙайым тип, машинкаға ултырҙым. Урынлы булһа, колаҡ һалырһың, булмаһа, ғәфү итерһең:

Һин беләһең, Өфөнөң беренсе интернатынан, заманында бына тигән кешеләр сыҡты. Һинең балаларҙың атаһы Диҡәт мәрхүм ана шул һирәк осрай торған алтын кешеләрҙең береһе ине. Диҡәттең балалары ла шул мәктәптә тәрбиәләнһә бик яҡшы булыр ине, бер үҙең бөтәһен дә йәшләп алып барып сығарыуҙары ай-һай ауыр бит ул. Үҙ башымдан кискән хәл бит, беләм...

Унан һуң улың / Илгизәр шикелле, ҡартлыҡ- оноттора / быйыл унды тамамлайҙыр бит? Уны а/х. институтына бирһәң яҡшы булмаҫмы? Ҡортсолоҡ буйынса !.. Бигерәк һәйбәт профессия бит. Унан һуң башҡорт балының даны бөттө бит. Был хужалыҡты юлға һалырҙай йөрәкле кадрҙар кәрәк. Гуманитар юл менән китеү үҙең беләһең, бик ауыр юл. Беҙҙең татар көрҙәштәр унда беҙҙе үткәрмәйҙәр ҙаһа! Унда ни эшләһәң дә күренмәй, бата торған бер һаҙлыҡ бит ул беҙҙең Башҡортостанда. Ә инде әҙәбиәткә ынтылышы бар икән былай ҙа юл таба ул. Ана бит, Диҡәт ҙур ғалим дә, геолог та, яҙыусы ла булып етеште. Тик ғүмере генә ҡыҫҡа булды шул...Талант та, кешелеклелек тә, мутарлыҡ та, барыһы ла мул бирелгәйне уға. Ҡыҫҡаһы Илгизәрҙең көмгә ҡарап тормош юлы һайларға бына тигән миҫалы алдын яктыртып тора!

Бына шул кәңәште әйтер өсөн яҙҙым был хатты.

Хуш, һау булығыҙ. Һеҙҙе һағынып Зәйнәб апайың.

Ғүмерҙең иң матур саҡтары: ғәмһеҙ бала-саҡ, хис-хыялдарҙан ғына үрелгән йәшлек йылдары тыуған ер, туған тәбиғәт менән бергә йөрәктә уйылып ҡала ла һәр саҡ һағындырып тик тора икән... Ер-һыуға яҡыныраҡ булғы килә. Шуны аңланым. Әле мин тап үҙем хыялланғанса йәшәйем. Тәҙрәм ҡаршыһында ғына тауҙар теҙмәһе, август төндәренең шау йондоҙҙарҙан торған күк йөҙө, ҡояштың тәгәрәп ҡалҡып сығыуы, тулған айҙың тотош ауылды нурға ҡойондороуы... Иртән уянып китеү менән аяҡтарыңдың ергә баҫыуы... Балаларымды һағыныуым, уларҙан алыҫ булыуым арҡаһында ғына күңелемдең бер яғы китек.

Ауылда йәшәү, тәбиғәткә һоҡланыу һәр саҡ Зәйнәб апайҙың "ауыл" тип өҙгәләнеүҙәрен иҫкә төшөрә.

Тура һүҙле булыуы, ялғанды, ике йөҙлөлөктө бөтөнләй кисерә алмауы ғына түгел, халҡына, туған теленә ҡарата әйтелгән кәмһетеүле фекерҙе лә, кешегә ҡарата күрәләтә булған ғәҙелһеҙлекте лә күтәрмәне ул. Үҙенә ҡарата булғанын тынысыраҡ үткәрҙе, ә инде халҡына ҡарата кире фекергә шунда уҡ энәләрен тырпайтып йомарланған терпе һымаҡ булыр ине.

Яҡын күргән мырҙаһы яҙып сыҡҡан "Уҡыусы менән Тәнҡитсе диалогы"нан һуң да әллә ни бошонманы ул. "Бәй, роман тип атап булмаһа, әҫәрҙәремә тап килгән икенсе исем ҡушһындар. Улай тәрән белемле ғалим булғас, уйлап тапһын. Роман ҡалыбын да ғалимдар уйлап сығарған бит. Ә мин яҙам. Халыҡ уҡый, һорап, эҙләп йөрөп уҡый әҫәрҙәремде. Шулай булғас, бәлки, "халыҡ романы" тигән ҡалып уйлап табырҙар. Заманында партияның Башҡортостан Өлкә Комитеты секретары Сайранов: "Биишева һымаҡ наҙандарҙы әҙәбиәттә йөрөтмәҫкә кәрәк. Беҙҙең Ғ.Рамазанов,

Ҡәҙерле Мәрйәм һылыу !

Һинән хат алып ҡыуандым. Вәҡит табып хат яҙыуың өсөн ҙур рәхмәт. Ҙур ғаилә- балалар тәрбиәләү, мәктәп тә ҙур эш алып барыу өҫтөнә әҙәбиәткә, халыҡҡа хеҙмәт итеү тигән оло маҡсаттар менән янып йәшәп йөрәүеңә ҡыуанып бөтә алмайым. Борондғосалап әйткәндә " алла " һаулыҡ " ҡына бирһен инде. Һаулығыңды онтома. Һаҡланыбыраҡ эшләргә тырыш. Беҙ аяҡтан йығылһаҡ ҡыуанырға торған тар күңелле лә ргә ем бирмәйек.

Һине бер ҙә ауылға ебәргем килмәгәйне. Әле күрәм, Мәрйәм һин, дөрөҫ уйлағанһың.Унда исмаһам тормош та, эш тә, кешеләр ҙә үҙебеҙҙә ябай һәм саф. Унаһуң ашыҡ- түлек тә һәр ҡалаға башҡа бит инде. Уныһы ла - иҫын аҙыҡ. Халыҡ:" тағы бер йылға китмәй тор" ти икән, бик дөрөҫ әйтә. Әле һин йәш, ҡалаға ҡайтып, бүлмәлә бикләнеп яҙып ултырырға өлгөрөрһөң. Унан һуң яҙыусы өсөн тормош мәктәбен үтеү ҙә бик кәрәк. Иң мөһиме- шул районды аяҡҡа баҫтырыу өсөн , һинең кеүек ҡайнар йөрәкле кешеләр кәрәк. Минеңсә , ҡайтҡанға хәтле, шул районға йәй һайын балалар менән ҡайтып торорға үҙ йортоң- үҙ мәйешең булдырыу хаҡында ла уйларға кәрәк һиңә. Бына мин шул хаҡта уйлай ҙа эшләй ҙә алмай ҡартайғаным өсөн үкенеп ҡуям. Нимә тип шул Өфөгә йәбешеп ятҡым икән, тим...

Мин бында килгәс тә , ауырыуҙы дауам итеп, эшкә тотона алмай йөрөнөм дә, аҙыҡ ултырып " Салауаттың һуңғы уйҙары" тигән поэма яҙып ташланым. Хатта " Ағиҙел"гә ебәреп тә ҡуйҙым. Үҙемсә, шәп поэма булды, һымаҡ. Ләкин улар ни тиерҙәр?!

Тельман да , Юлай ҙа быйыл , әлеккесә килеп йөрөй алмайҙар. Эштәр ҡаты.Телефонда һөйләшеп торабыҙ. Килсә Юлай:" Шишмә" не тәржемә итергә башлағайным, бер ҙә бөтөрөргә вәҡит бирмәйҙәр әле. СП-ға ағза булып алһам, эш ташлар ҙа ултырыр инем. 25 йыл хеҙмәт стажым бар инде"- тип зарланыбыраҡ торҙо. Ләкин беҙҙәсә "герой" уны алдырамы ни? Ҡулынан килһә, минең үҙемде ер ҡуйнына тығып



ҡуйыр ине әле. Малеевка ла уң ята инде ул, тип һөйләйҙәр. Бер үҙе түгел, бөтә ерҙән йыйылған үҙ кешеләре менән ята. Ленин премияһын өйөштөроп ята тиҙәр... Китә лә, ҡайта ла, үҙенең вотчинаһы кеүек иркен йәшәй.

" Совет Башҡортостаны" газетаһында Баязит Бикбай хаҡында яҙған мәҡәләһен уҡығанһыңдыр ? Оятһыҙ бит. Бикбайҙы милләтсе яһап партиянан сығартты, яҙыусылар Союзы ағзалығынан сығарыуҙы ойоштороҙо, бер мин ҡаршы килеп кенә уның был маҡсатын өҙҙөм... Әле мин тере, уның был әтлектәрен белеүсе/башҡа кешеләр ҙә бар әле, оялмай ҙа " дуҫ " булып яҙа бит , ?!..

Үҙен шул хәтле әҙәпһеҙ тота бит,ә ? . Мәҡәләһе шул хәтле йәнһеҙ, йәмһеҙ, түбән, килтергән миҫалдары бөтәһе лә ялған. ..

Шулар хаҡында уйлай башлаһам, Өфөгә аяҡ баҫып ҡайтаһым килмәй. Әгәр үҙ районымда берәр морон тәртәр өй булдырып алһам, Ырымбур аша тура районыма ҡайтып ҡына йөрөйөр инем. Азат Абдуллин шулай итә бит.

Йә, аллә ниҙәр яҙып бөттөм инде, ғәфү ит , Мәрйәм һылыу.

Сәйеңә, балаларға күп сәләм тапшыр.

Һине һағындым. Ҡасан йәй була инде...

Һау- һау бул.

Һағыныулы сәләмдәр менән /З. Биишева /

10.II.84.

117 571 г. Москва
ул. 26 Бакинских Комиссаров, 7
корп. 1, кв. 101
Алимову Ю.Г.

М.Ғәйнуллин кеүек ғалим яҙыусыларыбыҙ бар", — тип яҙып сыҡҡайны. Республикабыҙҙың төп өс гәзитендә өс телдә лә баҫылды сығышы. Бер ерем дә кителеп ҡалманы, ҡәләмемде лә һуғып төшөрә алманылар. Бәй, әҙәбиәттә урын иҫәплеме ни? Әҙәбиәт донъяһы киң. Йөрөһөн ғалимдар ҙа. Мине халҡым ярата икән, улар әйткәнсә, наҙан булһам да, мин дә йөрөйөм. Тик наҙанлыҡты һәм ғилемле булыуҙы нимәгә ҡарап үлсәй икән ул Сайранов? Шуныһы ғына билдәһеҙ. Икмәгем таҙа (хәләл мәғәнәһендә. — ***М.Б.***) булғас, урамда ла ултырып ашайым".

Хәтере ғәжәп шәп, зиһене яҡты булды. Күп уҡыны. Донъя классик әҙәбиәтен уҡыны, тәржемәләр итте. "Мин, Горький кеүек, тормош университетынан белем алам. Беҙҙең заман әҙиптәренең күбеһенә аудиторияларҙа ултырып, профессорҙарҙы тыңлап белем алырға насип булманы. Уның ҡарауы, белергә, күп белергә һәм шул белемде халыҡҡа еткерергә, тигән ынтылыш көслө. Тәғәйен үҙемдең төп маҡсатым — Лев Толстой кеүек, халҡымдың күңел матурлығын башҡаларға күрһәтергә. Толстой ябай рус халҡын ниндәй күтәрҙе! Минең халҡым да бөйөк тә, матур ҙа, бай күңелле лә. Аҙ һанлы булыу халыҡтың дәрәжәһен төшөрмәй бит ул. Ә телебеҙ ҡандай бай, һығылмалы, ниндәй фекерҙе әйтәм тиһәң дә, һүҙ таба алмай яфаланмайһың, тик һайла ғына. Эй, халҡым минең, шундай тел уйлап сығарып, шундай рухи байлыҡҡа эйә булғас, әлбиттә, бөйөкһөң һин... Күп ҡырылған шул, бик күп... Тик артабан нисек һаҡларға? Ауылдар бөтә, ҡала йота... Беҙҙең районда ғына күпме ауылдар юҡ ителгән. Башҡорт ауылдары ла, урыҫ ауылдары ла... Урыҫ ҡайҙа барһа ла урыҫ булып ҡала ла бит, ә бына ауылдарынан мәхрүм ителгән башҡорттар ни эшләйҙер?" — тип бошона ине ул.


16.I.1984

Ҡәҙерле Мәрйәм һылыу һәм балалар!

Һеҙгә һағыныулы сәләм һәм иң изге теләктәр.

Мин 7 ғинуарҙан бирле Малеевкала йәшәйем. Ике айға путевка һатып алдым да килдем. Сәләмәтлек бик ныҡ ҡаҡшағайны бит. Ғәжәп инде, Өфөгә ҡайттым, приступ булып больницаға инәм дә китәм. Унан Мәскәүгә килеп әкренләп нормаль хәлгә ҡайтып эшкә башлайым ғына тигәндә, ҡыш та үтеп китә, йәйгә тағы тыуған яҡ тарта... Быйыл, августың 15 дә генә Өфөгә ҡайтҡайным, ауырып та йығылдым, тағы йылдарыса улым килеп, больницанан алып сығып китте. Аптырарлыҡ хәл. Нимә эшләргә ?! Ҡартайған көндә тыуған ерҙе бөтөнләй ташлап китергәме икән...

Малеевкала ҡыш йылы, тәбиғәт яҡшы, әкренләп нормаға инеп барам. Тағы бер-ике аҙна ял итәм дә, унан әкренләп эшкә тотонорға тип уйлап торам. Бөгөн бына тәү тапҡыр ҡәләмгә тотоноп, һиңә хат яҙып ултырам. Үҙегеҙ ни хәлдә йәшәйһегеҙ. Бала-саға бирешмәйме. Фатима ҡыҙым нисә йәш тулды?

Теге йортто һалдырыу эше башланмағандыр әле ? Башланмаһа, Мәрйәм һылыу, һин уны ҡабартып, район етәкселәренең теңкәһенә тейеп маташма инде, йәме. Килешмәй. Мин теләнселәгән кеүек булып барғандай. Дөрөҫөн әйткәндә, миңә, был йәштә уның ни кәрәге бар? Минең генә түгел, минең ата-әсәмдең, дуҫтарымдың эҙен юйып, ҡәберҙәренә хәтле һөрөп бөткән, мин һөйгән сәскәле болондарҙы, сук тирәктәрҙең тамырын ҡоротҡан ергә, был йәштә ҡайтып ултырыуҙың ни мәғәнәһе бар?.. Шулай бит, Мәрйәм һылыу!

Беҙҙең халыҡ йомартлығын, аманатты баһалауын күптән онотҡан инде ул.

Мәрйәм, һылыу, һин бер мәҡәләңдә, Сәйетҡолда революцияға хәтле татар, башҡорт мәктәбе булған, тип яҙаһың. Был хата шикер. Унда революцияға хәтле русско-башкирское двухклассное/ йәки четырехкл/ училище булды. Ул йортто беҙҙең халыҡ " Таш һарай " тип йөрөтә ине. "Кәмһетелгәндәр"ҙә был хаҡта яҙылған. Бәлки ҡарарһың. Бик ҙур тарихи урын ул...

Зәйнәб апай менән ауылдарҙа осрашыуҙарҙа йөрөгән саҡта, Күгәрсен районындағы ауылдарҙа ғына түгел, хатта Ейәнсура районының Үрген ауылында ла Ғибаҙулла ағай Биишевты бик йылы итеп телгә алдылар. Хоҙайбирҙелә осрашҡанда бер ир уҙаманы ла былай тип һөйләне:

“Ғибаҙулла ағай ауылдан-ауылға йөрөп: “Ерһеҙ башҡорт башҡорт түгел, ауылдарығыҙҙан китмәгеҙ, йәштәр уҡыһын да һөнәр алып кире ҡайтһын, — тип аңлата торғайны. — Ҡитмәй ни эшләһен йәштәр, ауыҙындағы икмәген тартып алғас... Фермаңды күсереп алып китәләр, магазиныңды ябалар; йәштәр киткәс, балалар кәмей, балалар юҡ, тип мәктәбеңде ябалар. Бик төптән уйлап эш итәләр. Теләгәнеңде эшләп булмай. Балаларға сана яһап ҡына һатһаң да спекулянт тип саҡырталар. Ҡатын-ҡыҙға күптән шулай. Баҙарға бер генә шәл алып барһаң да, ауыл советынан: “Ҡәзә үҙемдеке”, — тигән справка кәрәк. Шунан ни эшләһен йәштәр? Ҡөн бирмәгәс... Форсатығыҙ булһа, бер ҡыҙыҡ һөйләйем әле. Хоҙайбирҙе ауылынан Мәләүезгә, ҡыҙымдың баҡсаһына, тиреҫ алып китеп барам. Шунда туҡтатып: “Тиреҫ үҙеңдекеме, справкаң бармы?” — тип һорайҙар. Бына ғәләмәт, ә?! Тиҙәгем үҙемдеке, тигән ҡағыҙ кәрәккән...”

*Таңсулпан ҡыҙымдың исемен Фатима тип яңылыш яҙған. Аҙаҡ телефондан шылтыратып, ҡартлыҡтан тип уйлама, һылыу, ашығыуҙан ул, тип, көлә-көлә төҙәтеп ҡуйҙы.*

## Байрастың прототибы Хисмәтулланы эҙләү

— Һылыу, әйҙә, тыуған яҡтарыма ҡайтып киләйек әле. Туйөмбәт ауылында бала сағы үткән, ауылын һағынып ҡайтҡан ябай ғына бер кеше булып. Урамларынан машинала түгел, үҙ аяғым менән атлап үтәйем, апайларҙың урындыҡтарында ултырып сәй эсәйем. Әйҙә әле, һылыу. Ҡулың бушаңҡырағас, тәүәккәлләйек...

Минең балаларым бәләкәй булғанлыҡтан, Зәйнәб апайҙың был хыялын тормошҡа ашырыу кисектерелә килде. Шулай ҙа форсат табып юлға сыҡтыҡ. Ҡыҙҙарымды әсәйемдәр, апайым, Нәсимә һылыуым (улар барыһы ла Өфөлә, Сиған туғайы тигән урында өй алып йәшәйҙәр ине) алып ҡалды, Илгизәр беҙҙең менән барҙы.

Тәүге оҙайлы сәйәхәтебеҙ Күгәрсен, Ейәнсура райондарына булды. Беҙҙе Мораҡтан килеп, Мәләүездә ҡаршыларға тейештәр ине. Поезға ултырҙыҡ.

— Һылыу, эс бушағансы һөйләшеп барайыҡ. Әллә ни эшләп тынғыһыҙ уйҙар борсой башланы. Уйҙар-уйҙар, Зәйнәб Биишева әйтмешләй, — тип йылмайып ҡуйҙы ла, тағы етди төҫ алып: — Бер төрлө төш күрәм дә күрәм, шул тынғы бирмәй йонсота, — тине. — Байрастың бала сағындағы прототибы тураһында һөйләгәнем бар бит инде. Хисмәтулла уның ысын исеме. Ул төшкә инә. Өлөкөгөн (элекке көн) төшөмдә май таныҫҡайым икән, тип күрәм. Ҡараһам, эргәмдә бәһлеүәндәй кәүҙәле Хисмәтулла минең май таныҫҡап, йомарлағанымды көтөп тора. Өлөш тә там итмәгән һымаҡ, китергә лә иҫәбе юҡ. Ни эшләптер өс йомғаҡ итеп йомарланым да береһен уға бирәйем, тип уйлап та өлгөрмәнем, Ғәзизем килеп инәсе. Хисмәтулла үҙәк өҙҙөрөрлөк ҡараш ташланы ла юҡ булды. Йөрәккәйем һыҙлап килеп уяндым. Бөгөн тағы Өфөлә, элек йәшәгән Зенцов урамынан китеп барам икән тейем, әллә ҡайҙан ҡаршыма Хисмәтулла килеп сыҡты ла күҙҙәрен тултырып миңә ҡарап тора. Күҙ алмалары тулы моң, бына-бына түгелеп китер һымаҡ. Ҡарап тора бирҙе лә әйелеп кенә бит осомдан үбеп алды. Шунан: “Зәйнәб, беҙгә күрешергә кәрәк ине”, — тине лә, яуабымды ла көтмәй, юҡ булды.

Етмеште уҙҙым бит инде, һылыу. Ул минән ике-өс йәшкә өлкәнерәк тә ине. Хәҙер етмеш биш — етмеш алты йәш тирәһе уға ла, иҫән булһа. Ә төшөмә һуңғы күргәндәге һымаҡ булып инә. Мыҡты буйлы, яҙыҡ яурынлы, тура ҡарарға ҡыйғыһыҙ, моңло-һағышлы ҡарашлы. Һиңә һөйләгәйнем дә бит, һуғыштан Ғәзиз ағайыңдың үлеме тураһында хәбәр алғас, ҡайғы уртаҡлашып бик күп хат килде, тип. Бер аҙҙан ағайыңдың Ленинград госпиталендә контузия менән ятыуы тураһында яңы хәбәре килде. Иҫәнлеген белгәс, ҡыуаныуыбыҙ... Эй, ул ауыр йылдарҙа өс бала, апайым... яңғыҙ минең елкәлә ине бит. Матди яҡты әйтәм. Былай апайымдың ҡул ярҙамы ҙур булды. Уныһын әйтергә лә түгел. “Балаларымдың атаһы иҫән, улар етем түгел”, — тип ҡыуанам. Үҙең беләһең, һылыу, ағайыңдың ниндәй хәлдә ҡайтҡанын... Ә шулай ҙа йәш саҡта нисек яраттым, һаман шул көйө яҡын иттем, тик тағы йәлләү тигән тойғо өҫтәлде.

Хисмәтулла инде... — бәхетһеҙ, ҡараңғы бала сағымдағы яҡты хәтирә ул, һылыу. Һәр ваҡыт мине ҡурсалап, малайҙарҙың йәберләүенән һаҡлап йөрөттө. Тик мин һыр бирмәҫкә тырыштым. Йәнәһе, уның ҡурсалауына мохтаж түгелмен. Ә бит яҡлашһа, ҡандай еңеллек килә ине үҙемә. Бер ваҡыт урам малайҙары мине үҙебеҙҙең өй яғына ебәрмәй, урамға арҡыры теҙелешеп торғандар ҙа: “Ҡатҡан кәзә бәрәсе, ҡыптыр тун, ҡараҡай”, — тип әбәкләйләр. Шул саҡ әллә ҡайҙан Хисмәтулла килеп сыҡты ла тегеләрҙе лешерләтеп ҡыуып ебәрҙе. Шунан мине

өйгә тиклем оҙатып ҡуйҙы. Йыуатманы, сөнки мин иламай инем. Аҫҡы иренемде ҡымтып тешләп тик килдем. Үҙемә рәхәт, минең бәһлеүәндәй ҡурсалаусым бар, бөтөн ауыл малайҙары унан ҡурҡа! Ҡайтҡас, өйҙә япа-яңғыҙым, бер кем күрмәй, шуға күҙ йәштәремә ирек бирҙем. Бер аҙҙан Хисмәтулла тағы йүгереп килеп етте лә был хәлгә шул тиклем аптырап ҡараны, әйтерһең, таш ҡурсаҡ илап ултыра. Текләп торҙо ла: “Зәйнәб, һин илама, йәме. Һин ҙурайғас, ҙу-у-ур булаһың. Өләсәйем шулай тине”, — тип йүгереп сығып китте. Үҙе нисек аңлағандыр инде өләсәһенең һүҙҙәрен, ә шулай ҙа йыуатырлыҡ һүҙ булғас, килеп әйтә һалып киткән булды. Имеш, ҙурайғас, ҙур булам...

Һылыу, ни эшләп ул минән май өмөт итеп көттө икән? Ни эшләп, күрешергә кәрәк ине, тине икән? Иҫән булһа, ҡайҙа ла инде... Ә әлеге көндә яҡты донъяла булмаһа... Күрешеү тураһында һөйләп, мине теге донъяға саҡырһа... Уйлауы ла ҡурҡыныс, һылыу. Минең күпме башланған эштәрем: ҡағыҙға төшкәндәре, төшмәгәндәре, әҙер әҫәр булып бешкәндәре... Эшем күп. Үлге килмәй бит әле, һылыу. Мин беләм, ул мине яратты, яратҡан. Буй еткергәс тә ауыл егеттәренә: “Зәйнәбкә мин өйләнәм, өмөтөгөҙҙө һуҙмағыҙ”, — тигән. Тик үҙемә ауыҙ асып бер һүҙ өндәшмәне. Минең Ырымбурҙа уҡыуым, комсомолка булыуым, сәсемде заманса йөрөтөүем башҡаларҙан айырып торҙо, әлбиттә. Хәҙерге аҡылым менән аңлайым мин — яҡын килергә ҡыймағандыр. Ауылға ҡайтҡан саҡтарымда әллә ҡайҙан күреп ҡалып йылмайып килә лә, минең тапҡырға етһә, йәһәт-йәһәт атлап үтеп китә торғайны.

Мин Темәскә уҡытырға киткәс, ҡайҙалыр барып эшләп, кейенеп ҡайтҡан, эргәмә килергә лә йыйынған, тиҙәр. Ә мин ул саҡта кейәүгә сыҡҡайным. Ғәзиз ағайың матур, ауылда бер егет. Гөрләтеп “Ғәлиәбаныу” спектаклен уйнайбыҙ. Ул — Хәлил, мин — Ғәлиәбаныу. Бер тапҡыр, спектакль барған саҡта, сәхнәлә мине ысынлап үпте лә алды. Шундағы оялыуым, шундағы ғәрләнеүем. Мин — ауылда йәштәр араһында иң өлгөлө кеше, заманса әүҙем ҡыҙ, комсомолка, алдынғы ҡарашлы уҡытыусы, уҡыған саҡта уҡ партия ағзалығына тәҡдим ителгәнмен, өҫтәүенә, күңелемдә генә үҙемде буласаҡ яҙыусы тип әҙерләп йөрөйөм (Өфөгә редакцияға тәүге хикәйәмде ебәргәйнем), ғаилә булдырыу тураһында уйлап та бирмәйем әле... Ә Ғәзиз ағайың — Хәлил — менән сәхнәлә ғәм халыҡ алдында үбешеп торам. Беләм, Ғәзиз быны юрый эшләне. Уның тәҡдименә яуап бирмәгәйнем. Минең ғәрсел, шул уҡ ваҡытта үтә әҙәпле икәнлегемде белә, хәҙер әллә ҡайҙа бара алмаҫ, тип уйланы ул. Ысынлап та, иртәгеһенә үк яусылап та килделәр. Мин ир ҡатыны булдым, тик Ғәзиздең рөхсәте менән үҙ фамилиямда ҡалдым.

Ауылда, Зәйнәб кейәүгә сыҡҡан, тигән хәбәр таралғас, минең эргәмә — Баймаҡ районына — килергә әҙерләнеп йөрөгән Хисмәтулла ҡайҙалыр сыҡҡан да киткән. Ауыл егеттәренең береһе: “Һинең арҡала Зәйнәбте ситкә ебәрҙек, ебегән икәнеңде белһәк, үҙебеҙ яусылай инек”, — тип асыуланған ти уға.

Шул хәбәрҙән һуң уның турала бер ни ҙә ишетмәнем. Ауылға ла бик һирәк ҡайтылды. Йәмғәт эштәре, ғаилә мәшәҡәттәре, Өфөгә килеп урынлашыу, фатир алыу, уны йүнәтеү-һипләтеү, теге (1934—1938. — ***М.Б.***) йылдарҙа райондан районға күсеп тә йәшәп алынды (Салауат һәм Мәсетле райондарында. — ***М.Б.***), бер-бер артлы тыуған малайҙарым, беренсеһенең үлеме — бер һүҙ менән әйткәндә, донъя йотто мине. Мин сараһыҙҙан Хисмәтулланы иҫтән сығарғанмын. Әлбиттә, “Ҡәмһетелгәндәр” романына тотонғас, ул гел генә минең менән бергә булды. Әммә бер ваҡытта ла төшөмә лә инмәне, уйландырманы ла. Йәш саҡта кемде кем һөймәй ҙә, кемдең кемгә күңеле төшмәй. Өйләнгәндер, ғаиләһе

барҙыр, тип уйланым. Ауылдаштарҙан һорашырға ҡыйманым. Ҡарағайҙай ире бар, йәшлек мөхәббәтен һорашып йөрөй, тиерҙәр кеүек булды.

Һылыу, сәйәхәтемдең бер маҡсаты — ауырлыҡта үтһә лә, яҡты биттәре лә булған бала сағым эҙҙәре буйлап ялан аяҡлап ҡына йөрөп килеү. Икенсеһе — Хисмәтулланың яҙмышы тураһында белешеп, күңелемде тынысландырыу. Май һорағас, минең ярҙамыма мохтаждыр ул. Тел ярҙамымы, матди ярҙаммы — ҡулдан килгән тиклем тырышырлыҡ әмәлем бар. Әле бына “Нәҙер” тигән пьесамдың гонорарын да тотош ҡына үҙем менән алдым. Күңел тыныслығы тапмай китһәм фани донъянан, теге донъяла ла тынғылыҡ булмаç, тип уйлайым.

Хисмәтулла фани донъянан киткән булһа, Зәйнәб апайҙың төшөнә инеп, күрешергә кәрәк ине беҙгә, тип торһа, ысынлап та, эсе бошобораҡ киткәндер апайҙың. Поезд (Күмертау—Өфө поезы. — ***М.Б.***) төндә килһә лә, йоҡлау форсаты тейһә лә, керпек тә ҡаҡманы. Һөйләшмәй-өндәшмәй генә ята бирә лә тағы күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп китә шикелле:

— Һылыу, яҙаһы әйберҙәрем шул тиклем күп бит әле минең, — тип һүҙ башлай. — Мәскәүҙә ҙур әҫәр башлағайным. Эй, был тормош тигәнең... Илгизәр улыма ла йоҡо бирмәйем шикелле...

— Борсолма, Зәйнәб апай, ул ятҡас та йоҡлап китте.

— Эй, ғәмһеҙ, уйһыҙ бала саҡ. Рәхәттер инде ул вайымһыҙ бала булыу. Вайымһыҙлығы менән бәхетле бит инде ул бала саҡ. Мин, һылыу, романдан уҡып беләһең инде, бер ваҡытта ла уйһыҙ-ғәмһеҙ булманым. Бала булманым мин. Уйлана ла йөрөй торғайным. Хисмәтулла: “Һин, Зәйнәб, ҙурайғас, ҙу-у-ур булаһың”, — тиһә лә, уйҙарым менән ҙураймаç элек үк ҙур булдым шул... Бала саҡ йылдарымдан Хисмәтулла ғына яҡты бер нур булып иҫемдә ҡалған. Ни эшләп онотҡанмын мин уны? Ни эшләп, үҙе төшөмә инмәйенсә, хәтерҙән һыҙып ташлағанмын... Хәйер, әҫәрҙәремде яҙғанда, корректураларын уҡығанда ла, рус теленә тәржемәләрем өҫтөндә эшләгәндә лә гел уны хәтерләй инем дә ул... Бына, Зәйнәб апай тиһәң дә Зәйнәб апай. Һикһәнгә аяҡ баҫҡан, ә йәшлек мөхәббәтен уйлап ята, тип көлөмһөрәп тә ҡуяһыңдыр инде. Беренсенән, үҙемде аҡлап ҡуяйым әле: ир ҡатыны булып, икенсе бер ир тураһында уйлап та булмай инде. Әйтәм бит, мин Ғәзизде йәш сағымда ла яраттым, ә инвалид булып ҡайтып, күҙҙәремә генә мөлдөрәп ҡарап тороуын күрһәм, йәлләй ҙә китә торғайным. Йәлләп тә яраттым. Ә Хисмәтулла мөхәббәт булдымы икән? Әллә йәшлектәге иң бәхетле минуттарымды хәтергә төшөрөүсе, яҡты күңелле саф йәнме? Ҡайһылай ғына булмаһын, мин уның яҙмышын белергә тейешмен. Ярҙам кәрәк булһа, ярҙам итергә лә кәрәк. Кем белә...

Һылыу, һуңғы күреүемде һөйләгәнем дә барҙыр әле. Бәлки, юҡтыр ҙа. Бер ваҡытта ла иркенләп һөйләшеп булмай бит һинең менән. Гел ашығыс ҡына. Бала үҫтергән саҡта шулай инде. Үҙ башымдан үтте, аңлайым. Әл дә әле, апай, тигән булып, ваҡыт табаһың. Рәхмәтлемен һиңә.

...Ленинград госпиталенән Ғәзизде алып ҡайттыҡ. Бер нисә көн бөтөнләй ҡуҙғалмай ятып ҡына торҙо. Бындағы хәрби госпиталдән килеп ҡарап-бағып йөрөнөләр. Теүәл сәғәтендә генә ашатырға ҡуштылар, теүәл сәғәтендә килеп укол яһап киттеләр. Ниһайәт, ултыртырға мөмкин, тинеләр. Бер ваҡыт төшкө сәй ваҡытында Хафаса апайым менән бергәләшеп өҫтәл янына артлы ултырғысҡа һөйәп ултырттыҡ. Һөйләшмәй ине әле. Ҡәнәғәт йылмайған булды. Апайым сәй яһап миңә тотторҙо, мин Ғәзиздең алдына өҫтәлгә ҡуйҙым да тотоп эсерергә әҙерләндем. Шул саҡта ғына ишек шаҡынылар. Инергә рөхсәт алғас, ишек шар

асылып китеп, оҙон буйлы бер ир кеше килеп инде. Тәүҙә, госпиталдәндер, тип уйланым. Шунан, редакциянанмы икән, яңы курьер алғандарҙыр, тип ҡуйҙым. “Ҡыҙыл Башҡортостан” (хәҙер “Башҡортостан”) гәзите редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр инем. Ағайыңды алып ҡайтҡан мәлдә эште өйгә лә алғылай торғайным.

— Һаумыһығыҙ!

Ниндәй яҡын, танһыҡ тауыш! Ысынлап та, улмы?!

Күптән-күптән ишетелмәгән был тауыш та, ниндәйҙер йылылыҡ бөрккән ҡараш та тәнемде земберләтеп эйҙе, Ғәзиз ағайыңа эсерергә тип һуҙған сынаяҡ өҫтө бер аҙ “бейеп” алды.

— Атаҡ-атаҡ, Хисмәтулла ла баһа, — тип барып күреште Хафаса апайым... Мин Хисмәтуллаға ҡайырылып ҡына ҡараным да эйәк ҡағып иҫәнләштем. Ғәзиз ағайыңа сәй эсергәс, Хисмәтулла менән ҡул биреп күрештем. Апайым уны әйҙүкләп сәйгә ултыртты. Ниҙер һораша башланы. Мин бер ни ишетмәнем дә, күрмәнем дә һымаҡ. Хисмәтулла менән бөтөнләй таныш булмаған Ғәзиз барыһын да аңланы. Апайымдың ихлас килеп күрешеүенәнме, минең тулҡынланыуымданмы, Хисмәтулланың тартынып ҡына һаулыҡ һорашыуынанмы, әллә үҙен күреп, аптырап китеүенәнме... Тотош ап-аҡ итеп уралған, ҡулдары ла, аяҡтары ла хәрәкәтһеҙ, тик күҙҙәре генә ялтырап ҡарап торған кеше ни әйтһен... Ғәзизгә күҙ һирпеп ҡарап алдым. Әйтеп аңлатҡыһыҙ хәсрәт ине уның ҡарашында. Ялбарыу, китмә, мине ташлап ҡуйма, тигән үтенес... Һылыу, ни эшләп шулай өҙгәләнде икән ул, Ғәзизде әйтәм? Ысынлап та, ташлап китер тип ҡурҡтымы? Минме һуң инде ир ташлап китер кеше, һылыу?! Ниндәй хәлдә лә ҡайтһын, атай булып түремдә генә ултырһын. Тик ҡайтһын ғына, тип, үҙем теләп тере ҡалдырҙым бит уны, балаларымдың атаһын...

Әмәлгә ҡалғандай, укол яһарға килделәр. Ғәзизде икенсе бүлмәгә алып сығыштым. Уколдан һуң тынысланып йоҡлап китте. Хафаса апайым Хисмәтулланы оҙата сыҡҡан, ҡапҡа төбөндә торалар ине. Зенцов урамында ағас йортта йәшәй инек. Мин дә ҡул биреп хушлаштым. Хисмәтулла ла, мин дә бер ни ҙә әйтә алмайбыҙ. Хафаса апайым һаубуллашты ла инеп китте.

— Ғәзиз ҡайтып яҡшы булған, — тигән булды ла, — ярай, һау булығыҙ. Бәхетле булығыҙ, — тине Хисмәтулла.

Ул китте... Ҡапҡа бағанаһына һөйәлеп тороп ҡалдым. Бер аҙ барғас, тағы боролоп ҡарап ҡул болғаны. Оҙон, һомғол буйлы, яҙыҡ яурынлы, һөйкөмлө ҡарашлы ир булып киткәйне. Әле төштәремә тап шул ҡиәфәттә инә.

## Туйөмбәт инәйҙәре менән

Зәйнәб апай юлға мул әҙерләнде. Күп итеп һинд сәйе, сәк-сәк алдыҡ.

Ошо урында һинд сәйе хаҡында, йәғни ул йылдарҙа бар нәмәгә ҡытлыҡ булған йылдар тураһында бер ваҡиға һөйләп үтәйем.

Өфө ҡалаһының Ленин һәм Октябрь революцияһы урамдары киҫешкән мөйөштә, хәҙерге Ҡаруанһарайға ҡаршы яҡта бәләкәй генә “Сәй” магазины булды. Уның ыҡсым ғына һәм һәр ваҡыт халыҡ тулы сәй эсә торған залы ла бар ине. Магазин мөдире — Азалия Хисмәтуллина менән ярҙамсыһы Нәсихә (фамилияһын хәтерләмәйем) апайҙар булды. Азалия апай — яҙыусы Зөлфәр Хисмәтуллиндың ҡатыны ине. Бик тә ипле, кешелекле, итәғәтле булды ул. Һинд сәйенә генә түгел, хатта бөртөклө грузин сәйенә лә ҡытлыҡ йылдарҙа Азалия апай ипләп кенә Зәйнәб Биишеваға ла, башҡа яҙыусыларҙың ҡатындарына ла

һинд сәйе биргеләй ине. Бер ваҡыт Зәйнәб апайға тип сәй алырға барһам, Азалия менән Нәсихә апайҙар аптырашып ултыралар. Баҡһаң, сәй алып килергә йөк машинаһы юҡ икән.

— Машина тапһам, биреп торған кешегә лә сәй алып булыр бит? — тип һорайым.

— Әлбиттә. Сәй фабрикаһы директоры Панчихин үҙе лә: “Сәй бирәбеҙ, тип эҙләгеҙ машинаны”, — тип тәҡдим итте. Мин “Совет Башҡортостаны” газетаһында эшләй инем. Редакторыбыҙ Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилевҡа әйттем был хаҡта. Ул типография менән һөйләште лә машина тапты. Сәй фабрикаһына Нәсихә апай менән мин дә барҙым. Бер машина сәй килтерҙек магазинға, өс йәшниген редакцияға ебәрҙеләр, тиҙ генә һатып, аҡсаһын килтереп түләгеҙ инде, тип ҡалдылар. Зәйнәб апайға 50 әсмуха сәй алып килгәйнем — аптырап китте. “Ауылдаштарыма бынан да ҙур күстәнәс булмаç!” — тип ҡыуанды. Ошонан һуң машина кәрәк булһа, ошондай уҡ шарт менән шылтырата торғайнылар. Тотош редакция хеҙмәткәрҙәрен һинд сәйе менән тәьмин иттек ул йылдарҙа.

Зәйнәб апайҙың тағы үҙенә генә хас бер ғәҙәте бар ине — командировкаға сыҡҡанда ла, ял итергә киткәндә лә, хатта “Йәшел сауҡалыҡ” (”Зеленая роща”) санаторийына ял итергә барған саҡта ла сәк-сәк ала торғайны. Үҙен оҙата килеүселәргә мотлаҡ сәк-сәкләп сәй эсерә, ә ҡунаҡҡа саҡырғандарға күстәнәскә сәй тотоп бара торғайны. Сәк-сәкте күбеһенсә минән алдыртты.

— Һылыу, форсатың булһа, сәк-сәк алып кил әле. Апайымдың күҙе насар күргәс, һайлай белмәй. Төçө тоноҡланып бөткәнен ала ла ҡайта. Һатыусылар ҙа иçкеһен тоттора ла ебәрәләр, — ти торғайны, юлға сығыр булһаҡ та, ҡунаҡ көтһә лә. Мин сәк-сәкте Совет майҙанындағы Министрҙар Советы йортондағы (хәҙер Ауыл хужалығы министрлығы йорто) ашхананан ала торғайным. Ашханаға инер урында бай-бай буфеттар була торғайны.

Мораҡта ҡунаҡханала туҡтаныҡ. Беҙҙе машина менән Туйөмбәткә алып барҙылар. Артабан Зәйнәб апай менән икәүләшеп кенә ауыл урамы буйлап юл алдыҡ. Зәйнәб апай үткәндәрҙе иçкә төшөрә, роман геройҙарының прототиптары тураһында һөйләй-һөйләй бара. Шул саҡ ҡаршыға килеүсе бер инәй туҡтап ҡарап торҙо ла:

— Аһ, әллә Зәйнәб апай инде?! Ни эшләп улайтып китеп бараһығыҙ? — тип шул тиклем аптыраны, әйтерһең, йәй көнө санаға ултырып елдерәбеҙ.

— Ошолайтып китеп барыр өсөн килдем әле, һылыу. Һаумы!

“Һылыу” тигән инәй аяғына йөн ойоҡ менән галош кейеп, башына боронғоса яулыҡ бөркәнеп, кәзәкей кейеп алғайны. Зәйнәб апай янында ул инәй хатта олораҡ та күренә ине. Шул арала тағы ла өлкәнерәк икенсе инәй йүгереп сыҡты:

— Зәйнәб апай, һаумы? Ҡемгә килдең, ҡасан килдең? Форсат тапһаң, әйҙә, инеп сәй эсегеҙ. Мәрйәм ҡыҙым, шәпмеһең? Мин ҡыҙымды танийым, бик йыш яҙыша, үҙебеҙҙең Эйек буйынан бит. Әйҙәгеҙ, самауырым шажлап ултыра.

— Сәй эсергә инәм. Тик утъяҡҡысың, урындығың бармы? Урындыҡҡа ултырып тороп сәйләп алһам ғына, һыуһыным ҡаныр һымаҡ. Самауыр сәйе лә, утъяҡҡыс еçе лә танһыҡ миңә...

— Беҙ өйҙәге урындыҡты ла алманыҡ. Алдыртманым. Мейесемә арҡа терәп тороп ултырыуға йәтеш. Әйҙә, әйҙә, апай. Әйҙә, һылыу.

— Зәйнәб апай, улай булғас, мин дә ҡайтып әҙерләнәйем. Беҙгә лә инерһегеҙ, — тине тәү осраҡан инәй.

— Улай итмәйек, рәхмәт. Бер генә урында ултырайыҡ та ҡуяйыҡ. Ваҡыт ҡынабыҙ наҡыҫ беҙҙең. Ни эшләп әле һеҙ миңә “апай” тейһегеҙ? Ололапмы, әллә, ысынлап та, апаймынмы?

— Апайһың, Зәйнәб апай. Ырымбурҙан комсомол булып ҡайтып, беҙҙе йыйып алып, пионерға алдың бит. Әллә нисә йыр өйрәтеп, “Һәр ваҡыт әҙер!” тип анттар әйттереп, тотош ауылға оло тантана яһағайның. Галстуктар тағып, әллә кем булып йөрөп яттыҡ беҙ ҙә. Ул галстуктарҙы кем, ҡайҙан алған икән — унынын хәтерләмәйем...

Зәйнәб апай командировкаға сыҡҡан саҡта үҙенә нык иғтибар итте. “Халыҡ алдына матур булып сығыу — үҙеңде лә, халыҡты ла ихтирам итеү ул”, — ти торғайны. Сәсенә прическа яһата, педикюр, маникюр һалдыра. Әле лә терһәктән түбәнерәк оҙонлоҡта еңле, килешле генә тегелгән, ялан сәскәләре төшөрөлгән шифон күлдәк кейҙе, гәрәбә муйынсаҡ, алҡа, алтын сәғәт, аяғында танкетка, сәсе елкәһенә тиклем матур итеп ҡырҡылып, прическа эшләтелгәйне. Маңлайын аҙ ғына ҡаплатыбыраҡ ҡуйыуҙы яратты. “Маңлайым үтә яҫы, нык асыҡ ҡалдырырға яратмайым”, — ти торғайны.

Беҙ сәй эсергә индек. Өй иркен, яҡты, таҙа. Мейес ап-аҡ итеп ағартылған. Ысынлап та, өйҙә буйҙан-буйға һалынған урындыҡ бар. Ҡуҙ асып йомған арала инәйҙәр, апайҙар йыйылып китте. Оло табын әҙер булды. Табынға ни генә ултыртманылар! Әйтерһең, беҙҙең килерҙе, тап ошо өйгә инерҙе белеп, алдан әҙерләнеп торғандар инде! Һәр береһе Зәйнәб апайҙың ошолайтып күрешергә форсат таба алыуына рәхмәт әйтә, ҡыуаныуҙарын белдерә. Шуныһы ҡыҙыҡ, береһе-бер зар, үҙ ҡайғы-хәсрәтен һөйләмәне, боронғо ҡыҙыҡтарҙы, Зәйнәб апайҙың бәләкәйҙән зирәк булыуын, тура һүҙе менән кеше аптыратыуын, әҫәрҙәрендәге ваҡиғаларҙы һөйләп ултырҙылар. Инәйҙәр урындыҡтың түр яғына, ашъяулыҡ тирәләп, тубыҡтарын бөкләп ултырҙы, Зәйнәб апай урындыҡтың мейес эргәһенән урын алды.

— Минең тубыҡтар һеҙҙеке һымаҡ оҫта бөкләнмәй икән. Ошолайтып ултырайым да ҡуяйым. Үҙем урындыҡ һағынып ҡайтҡан булдым, үҙем урындыҡса ултыра белмәйем, — тип көлдөрөп алды.

— Үҙеңә нисек уңайлы, шулай ултыр, Зәйнәб апай.

— Һылыуҙар, һылыу булһағыҙ ҙа, миңә “апай” тип әйтмәгеҙ. Тыуған ауылымда өлкән булып йөрөгөм килмәй.

— Исем менән өндәшеү әллә нисек бит әле...

— Бер көнгә әллә ни яҙыҡ булмаҫ.

Ҡаймаҡлы ҡорот, ҡаймаҡлы ҡыҙыл эремсек, сейәле май, ҡоймаҡ, бал, ярмаланып торған иретелгән һап-һары май, талҡан, ни арала өлгөрткәндәрҙер — күбекмай менән айран килтереп еткерҙеләр, “асығауыҙ” тип аталған муйыллы ваҡ бәлеш, балан бәлеше.

— Ҡәҙерле ҡунаҡҡа тип кенә һаҡлап ҡуйған филле сәйем бар ине, — тип, хужабикә инәй һары ҡаплы һинд сәйе һалып ебәрҙе сәйгүненә.

— Оло байрам, кесе туй яһаныгыҙ ҙа ҡуйҙығыҙ бит, ауылдаштарым. Рәхмәт инде. — Зәйнәб апай шул тиклем ҡәнәғәт булды, тик һиҙеп торам: үҙен иң борсоған һорауҙы бирергә ҡыймай ине.

— Зәйнәб апай, романдағы геройҙар менән бергә ултырыу ҡыҙыҡтыр ҙа, рәхәттер ҙә инде. Тик Байрас, Иштуған, Хәбирҙәр генә етмәй бында, — тип һүҙ башлап, табындағыларға “фекер йомғағының еп осон” тотторҙом.

— Иштуғаны Ғибаҙулла ағай инде. Байрасы кемдер, бәләкәй сағы Хисмәтулланан алынған шикелле, — тине аранан берәү.

— Барыһын да танып торалар үҙҙәре. Ә Хисмәтулла әле ҡайҙа икән? — тине Зәйнәб апай, үҙе ялт итеп минең яҡҡа ҡарап, ҡалай йәтеш иттең әле, тигәндәй, ҡәнәғәт йылмайып ҡуйҙы.

— Бик ҡатмарлы яҙмышлы кеше булды инде Хисмәтулла. Һине һырт яҡта кейәүгә сыҡҡан тип ишеткәс, ауыл егеттәре: "Зәйнәб ауылдан ситкә ебәрә торған ҡыҙ түгел ине. Һин ысҡындырҙың ҡулдан", — тип туҡмай яҙғандар, ти. Шунан ул Ырымбур сығып киткән. Һуғыш бөтөр алданыраҡ ҡулы яраланып ҡайтҡан да, ауылда толҡа тапмай, тағы Ырымбур сығып киткән, ти. Бер тапҡыр өйләнеп тә маташҡан шикелле. Шул буйҙаҡ көйө ҡалған ул. Ҡемдер үлгән тип тә һөйләп ҡалды. Үлгәндер. Унан бирле кеше ер аяғы-ер башынан да тыуған яғына бер ҡайтмаһа, бер ҡайтыр ине, иҫән булһа. Аҙып-туҙып йөрөй торған ир түгел ине бит ул.

— Шәп егет ине. Зәйнәб апайҙың китаптарында ҡандай матур һүрәтләнгән ул.

— Ысынлап та, шулай кешелекле, әҙәпле булды ул Хисмәтулла.

Мин Зәйнәб апай яғына ҡарарға ҡыймай ултырҙым. Ни кисергәндер ул ошо мәлдә — белмәйем. Ярай, әмәлгә ҡалғандай, ялпылдап, етеҙ баҫып бер инәй килеп инде.

Романдағы Сыуаҡай инәй килеп ингән һымаҡ булғас, үҙем дә абайламай ҡалдым:

— Сыуаҡай инәй... — тип, урындыҡтан һикереп төштөм.

— Ҡалай дөрөҫ төҫмөрләнең, һылыу. Сыуаҡай образының прототибы шул уның әсәһе.

Зәйнәб апай килгән ҡунаҡтарҙың барыһына ла сәй өләшеп сыҡты. Һинд сәйенә ныҡ ҡыуандылар. Тик Зәйнәб апайҙың ғына кәйефе төшөнкө ине.

Был сәйәхәттән ныҡ бошоноп ҡайтты. Хисмәтулла тураһында ла дөрөҫөн генә белә алманыҡ, ауыл тирәһендәге тәбиғәттең төҫһеҙләнеүе лә борсоуға һалды апайҙы, бик күп ауылдарҙың, шул иҫәптән үҙ ауылының да "киләсәкһеҙ" ауылдар исемлегендә булыуы күңелен әйтеп аңлатҡыһыҙ ныҡ төшөрҙө. Өфөлә оҙаҡ торманы, Мәскәүгә китте.

## "Мөһөрлө" ауылдар тарихы

Туйөмбәттең "киләсәкһеҙ ауылдар" исемлегенә индерелеүе борсоуға һәм уйға һалды мине. Ниндәй проект ул, ауылдар исемлеген кем төҙөй, ниндәй шарттар иҫәпкә алына? Өфөгә ҡайтҡас, мөһөр һалынған ауылдар тураһында мөмкин тиклем барыһын да асыҡланым. "Киләсәкһеҙ ауылдар" тип аталған проект авторы — иҡтисад академигы, Никита Сергеевич Хрущевтың кәңәшсеһе Татьяна Ивановна Заславская икән. Яҡын йылдарҙа ил буйлап байтаҡ бәләкәй ауылдар эреләтеләсәк һәм был эш киң ҡолас ала башлаған.

Халҡыбыҙ һәм ауылдар яҙмышына битараф булмаған илһөйәр замандаштарыбыҙҙан "Совет Башҡортостаны" газетаһы редакцияһына хаттар килә башланы. Стәрлетамаҡ районы Әйыусы ауылы халҡынан Әшҡаҙар йылғаһының ярҙы ашап, ауылға етеп килеүе, Күмертау районы (хәҙерге Көйөргәҙе) Туғай Кинйәһе ауылынан Хәмитова Мәфтуха исемле апайҙан Кинйәабыҙ ауылының аяныслы яҙмышҡа дусар ителеүе тураһында хат килде. "Р. Әбдрәшитов был тарихи ауылды бөтөрөүгә табан алып бара. Үҙе теләгән ауылдарҙы бер ҙә ҡуҙғатмай. Бәләкәй генә Шәбәғош ауылын хәҙер совхоз үҙәгенә әйләндерҙе, юлдар һалдыра, ә илебеҙгә өс Советтар Союзы Геройы биргән тарихи

ауылды киләсәкһеҙ тип, мәңгелеккә юҡ итеүгә дусар итә", — тип яҙылғайны Хәмитова апайҙың хатында.

Диҡҡәт менән кәңәшләштек тә боронғо тарихи ауылдарҙы ҡурсалау буйынса эш башларға булдыҡ. Күмертау районына барып, Холодный Ключ тип аталған тупланмала (ауыл тип тә, ҡасаба тип тә әйтеп булмай ине ул саҡта) элекке Үрге Мотал халҡы менән осраштыҡ. Ауылда иң элек магазин ябылған, ферма Холодный Ключҡа күсерелгән. "Ферманы күсереп алып китмәһәләр, бер генә лә китергә иҫәп юҡ ине ауылдан, электр сымдарына тиклем ҡырҡып бөткәс, ҡайҙа бараһың, күстек шул", — тинеләр моталдар. Диҡҡәт тыуған ауылы тураһында "Ауыл бөттө, проблемалар ҡалды" тигән мәҡәлә яҙҙы. Әммә ауыл халҡы илебеҙҙең төрлө тарафтарына тырым-тырағай күсеп бөткәйне инде, ҡабат ҡайтыу теләге белдереүсе булманы. "Донъябыҙ туҙҙырылды, халыҡ тырым-тырағай таралышты. Эш юҡ. Юҡҡа сыҡтыҡ инде. Ҡайһылайтып ҡына яңынан тергеҙәһең ауылды? Совхоз үҙе тарҡатҡас", — тинеләр. Ошо хәл булмаһын, Туйөмбәт, Ҡинйәабыҙ ауылдары ла шул хәлдә ҡалмаһын өсөн, был мәсьәләгә тиҙерәк тотонорға, ашығыс рәүештә мотлаҡ мәҡәлә яҙырға кәрәк, тигән һығымта яһап, "Совет Башҡортостаны" газетаһы редакторы А.Исмәғилевҡа индем, редактор был фекерҙе хупланы. Мин "перспективаһыҙ" мөһөрө һалынған ауылдар тураһындағы мәғлүмәттәрҙе тупланым да мәҡәлә яҙҙым һәм ул 1979 йылдың 6 декабрендә "Бөгөнгөбөҙ һәм иртәгәһе көнөбөҙ хаҡына" тигән исем менән баҫылып сыҡты. (Мәҡәләне тотош биреүҙе урынлы тип һанайым, сөнки был проблема һаман да көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала әле).

*Бөгөнгөбөҙ һәм иртәгәһе көнөбөҙ хаҡына*

"Редакцияға тәбиғәтте һаҡлау тураһында борсолоп яҙылған мәҡәләләр күп килә. Халыҡ һәр саҡ һауаны зәңгәр, йылғаларҙы саф һәм тулы һыулы, тупраҡты һутлы һәм уңдырышлы хәлдә күргеһе килә. Был, әлбиттә, уның киләсәк хаҡында оло хәстәрлеге. Тарихи ваҡиғаларға бай булған ауылдарҙы, ҡомартҡыларҙы һаҡлап ҡалдырыу хаҡында яҙылған хаттар ҙа байтаҡ.

Яңыраҡ Стәрлетамаҡ районының Ашҡаҙар ауыл Советына ҡараған Айыусы ауылы халҡынан редакцияға ошондай хат килде:

"...Яҙын Ашҡаҙар бик ныҡ таша. Ул ярҙы ашай. Хәҙер ауылға килеп етте инде. Йыл һайын 10 метр самаһы ҡара тупраҡлы ер емерелеп әрәм була. Ауылға ла, зыяратҡа ла юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янай, ә ул зыяратта данлыҡлы Ашҡаҙар йырын сығарған инәй ерләнгән. Унда Блюхер рейдында, Ҡаширин отрядында ҡатнашып, Совет власы өсөн ҡан ҡойған беҙҙең олатайҙар, атайҙар ята. Чапаев дивизияһында эскадрон командиры булып хеҙмәт иткән Сибәғәт Аҙнаевтың ҡәбере лә ошонда..."

Хатҡа күп кеше ҡул ҡуйған. Улар араһында өлкәндәр ҙә, йәштәр ҙә, коммунистар ҙа, комсомолецтар ҙа бар.

Дәүләтебеҙ тарихи ҡомартҡылар, иҫтәлекле урындар иҫәбендә Бородино яланын, Куликово яланын, Брест крепосын, Пискарев ҡәберлеген һәм башҡа шундай урындарҙы үҙ һағына алған икән — киләсәк беҙгә быны өсөн рәхмәт кенә әйтер. Уларҙы һаҡлау — изге бурысыбыҙ. Үткәнебеҙгә, тарихыбыҙға ҡарата ихтирамлы булыу — ул киләсәккә лә һөйөү тәрбиәләү тигән һүҙ. Ул иленде, тыуған ауылыңды, тормошто, халҡыңды яратыу — патриотизм тойғоһо. Был тойғоно йәш быуынға өгөт-нәсихәт һөйләп кенә тәрбиәләп булмай. Был тойғо көндәлек тормош, шәхси өлгө, үҙе шаһит булған хәл-ваҡиғалар аша баланың, үҫмерҙең күңеленә һеңә бара. Һәм, әлбиттә, һәйбәт орлоҡ, йәнле тәрбиә күрһә, насар емеш бирмәй.

Ә үрҙә әйтелгән хатта яҙылғанса, илебеҙ азатлығы, бөгөнгө бәхетле тормошобоҙ өсөн үҙҙәрен аямайынса көрәшеп һәләк булыусылар зыяратына, тарихи ваҡиғаларға бай булған ауылдарға ҡарата вайымһыҙлыҡ күрһәтәбеҙ икән, хатта үҙ атай-олатайҙарыбыҙ, әсәй-өләсәйҙәребеҙ ерләнгән ҡәбер өҫтөн малдан тапатыуға, трактор тәгәрмәстәре аҫтында ҡалдырыуға юл ҡуябыҙ икән — йәш быуын бынан, әлбиттә, үҙенсә һығымта яһар.

Ә быңдай миҫалдар, үкенес, аҙ түгел. Перспективаһыҙ ауыл, ауылдарҙы эреләтәбеҙ, тигән булып, беҙ кешенең йәшәүе өсөн иң әһәмиәтле шарттарҙың береһе булған йән аҙығы хаҡында онотабыҙ. Һүҙ юҡ, ауылдарҙы эреләтеү — заман талабы. Әммә перспектив план төҙөгәндә экономик күҙлектән сығып ҡына эш итергә ярамай. Тарихи яҡтан әһәмиәтле, иҫтәлекле урындарға бай булған, күренекле кешеләр йәшәгән ауылдарҙы һаҡлап ҡалдырыу ҙа, беҙҙеңсә, маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Юғиһә, киләсәк быуын алдында төҙәтә алмаҫлыҡ хата эшләүебеҙ ихтимал. Мәҫәлән, Ейәнсура районының Чапаев исемендәге колхозына ҡараған Байдәүләт ауылы бер нисә генә өйгә ҡалып бара. Ә ул ауыл урамдарында комсомолец Сергей Чекмаревтың, Советтар Союзы Геройы Ҡотлоәхмәт Хәйбуллиндың йөрөгән эҙҙәре ҡалған бит. Ә күренекле яҙыусыбыҙ, Салауат Юлаев премияһы лауреаты Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылы Туйөмбәт ҡайҙа? Нисә өй ҡалды икән унда? Революцияға тиклем үк мәктәбе булған, гөрләп торған ауыл булған бит ул. Халыҡ геройы Салауат Юлаевтың тыуған ауылын XVIII быуат аҙағында батша һалдаттары көл иткән. Быны балаларыбыҙ белә. Ә Пугачевтың көрәштәше, иң яҡын кәңәшсеһе Кинйә Арыҫлановтың исемен йөрөткән, 60 өйлөк ауыл сағында илебеҙгә өс герой биргән Кинйә ауылы ҡайҙа, тип һораһалар, балаларыбыҙға ни тип яуап бирербеҙ?

Партия һәм дәүләтебеҙ политикаһы улай түгел. Беҙ Л.Толстой, А.Пушкин, А.Блок, Ф.Тютчев һәм башҡа бөйөк кешеләрҙең йәшәгән урындарын, йөрөгән эҙҙәрен, улар менән бәйле булған һәр иҫтәлекте ҡәҙерләп һаҡлайбыҙ, эҙләйбеҙ, табабыҙ. Киләсәк быуын бының өсөн рәхмәт кенә әйтер.

Кешеләрҙең генә түгел, ауылдарҙың да "биография"лары була. Яҡын көндәрҙә республикала 3005 "перспективаһыҙ" ауыл күсерелергә тейеш икән ("Советская Башкирия", 1976), аҙаҡ төҙәтә алмаҫлыҡ хатаға юл ҡуйылмаһын ине.

Һуңғы йылдарҙа, атап әйткәндә, туғыҙынсы һәм унынсы биш йыллыҡтар осоронда етди проблемаларҙың береһе булып әүерелгән ауылдарҙы "йәшәртеү" йәки йәштәрҙе ауылда ҡалдырыу проблемаһы ла ошоноң менән бәйле түгелме икән?

Йәш быуынды тәрбиәләүҙә һәр ғаиләнең генә түгел, һәр ауылдың да үҙ традицияһы бар. Ә ул традицияларҙы ауылдары менән бергә емереп ташлау, юҡ итеү — тәрбиә нигеҙен ҡаҡшатыу түгелме?

Шул уҡ Айыусы ауылы халҡы үҙ балаларын һоҡланғыс легенда һәм йырҙың авторы, иҫ киткес бай күңелле сәсән ҡатын йәки зыяратта ерләнгән батырҙар рухында тәрбиәләгәндәр бит. Артабан да ошо традицияла нисәмә быуын тәрбиәләнер. Ә Бөйөк Ватан һуғышында Башҡорт дивизияһы Днепр аша сыҡҡанда йырҙарҙа, поэмаларҙа данланлыҡ батырлыҡ күрһәткән Ҡ.Хәйбуллин йәки коллективлаштырыу осоронда илебеҙ баш ҡалаһынан үҙ теләге менән иң төпкөл райондарҙың береһенә килеүсе Мәскәү шағиры Сергей Чекмарев өлгөһөндә әллә ниндәй тәрбиәүи эштәр алып барып булыр ине бит. Ергә ерегеү, тыуған тупрағыңа, эскән һыуыңа, халҡыңа мөхәббәт ошо төшөнсәләрҙән башланалыр. Ә тыуған ереңде яратһаң, бәхет эҙләп ситкә китеү яғын ҡарамайһың, ә үҙ йортоңдо тағы ла гүзәлерәк, тағы ла һоҡланғысыраҡ итергә, үткән быуын традицияларына тоғро

булырға ынтылаһың. Юғиһә, йәштәрҙе ауылда ҡалдырыуҙың төрлө юлдарын эҙләйбеҙ. Әҙер квартиралар, культура һарайҙары төҙөп, ҡолас йәйеп ҡаршы алырға ниәтләнәбеҙ. Был дөрөҫмө һуң? Йәштәр "әҙергә мин хәҙер" тип кенә йәшәмәҫтәрме? Бындай юлдар менән ауылға кире ҡайтарылған йәштәр тупраҡ еҫен тойормо ла, ысыҡ кисеп ялан аяҡ йөрөү ләззәтен белерме? Йәштәрҙе кире ҡайтарыуҙан алда уларҙы ебәрмәү яғын ҡарарға кәрәктер. Ә уның төп хикмәте, әйтеп үтеүебеҙсә, тыуған ергә, ауыл традицияларына һөйөү тәрбиәләүҙә.

Һәр ауылдың үҙ традицияһы бар, тигән фекергә миҫал итеп Ейәнсура районының Ибрай ауылы хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп китмәксемен. Унда элек-электән ҡалған һәйбәт ғәҙәт — ҡайғыны ла, ауырлыҡты ла бергәләп үткәреү, уйын-көлкө менән еңеләйтеү, шатлыҡты ла уртаҡлашыу бар. Ошо традиция әле лә һаҡлана. Өмәләр, кис ултырыуҙар, киске уйындар, һабан туйҙары уға миҫал. Был ауылда самаһыҙ шапырыныуға, маҡтаныуға, көнсөллөккә юл ҡуйылмай, бер-береңде һөйләү, кеше етешһеҙлегенән көлөү юҡ. Абайламай маҡтанып ҡара — йор һүҙле еңгәләр, шаян ҡыҙҙар шунда уҡ эләктереп тә алыр, киске уйында һиңә төрттөрөп таҡмағын да әйтер. Был үҙе тәрбиә мәктәбе түгелме ни?

Ауыл — ул культурабыҙ үҫеш алған һәм сәскә атҡан сығанаҡ. Ул — һутлы әҙәби тел сығанағы, һәйбәт традициялар тупланмаһы. Ошондай ауылдарҙы һаҡлап ҡалдырыу — аҡыл менән эш итеү һәм алдан күреүсәнлек булыр ине. Юғиһә, матбуғатта ошо мәсьәлә буйынса сығыш яһаусы ҡайһы бер иптәштәр мәсьәләнең техник һәм экономик яғын ғына күҙҙә тота.

СССР Конституцияһында: "Тарихи ҡомартҡыларҙы һәм башҡа культура байлыҡтарын һаҡлау тураһында хәстәрлек — СССР гражданының бурысы һәм вазифаһы" — тип әйтелгән. Республиканың социаль үҫеше буйынса комплекслы планын төҙөгәндә, ауылдарҙың киләсәген хәл иткәндә, был проблема бер яҡлы, дөйөм проект буйынса ғына хәл ителмәһен, ә ауылдарҙың һәйбәт традициялары, тарихи яҡтан әһәмиәте, иҫтәлекле ваҡиғаларға бай булыуы, ҡыҫҡаһы — уның биографияһы иҫәпкә алынһын ине".

Проблема күтәрелгән мәҡәләләрҙе тейешле рәсми ойошмаларға ебәреп, яуап талап итеү мотлаҡ була торғайны ул йылдарҙа. Шуға күрә был мәҡәләне лә Стәрлетамаҡ, Күгәрсен, Ейәнсура, Күмертау (хәҙер Көйөргәҙе) райондарының башҡарма комитеттарына һалдыҡ.

Төрлө төбәктәрҙән төрлө яуаптар килде. Был яуаптарҙың икәүһе, атап әйткәндә, Күгәрсен менән Көйөргәҙенән килгәндәре, ҡәнәғәтләндерерлек түгел ине, шуға күрә яңынан мәҡәлә яҙырға тура килде.

Зәйнәб Биишева ул саҡта ижади ялда ине, шуның өсөн мәҡәлә менән дә, яуабы менән дә борсоманым, шатландырырлыҡ яуап килһә, уҡытырмын, тип уйлағайным, үкенес, уның үҙ районынан ҡыуанырлыҡ яуап булманы.

Күгәрсен районы Советы башҡарма комитеты рәйесе Мөхтәр Шәриповтан ошондай яуап килде:

"Туйөмбәт ауылы "Октябрь" совхозы территорияһында. Хәҙерге көндә унда 39 өй бар, 132 кеше йәшәй, ауылда башланғыс мәктәп эшләй. Магазин, 500 баш һыйыр малы иҫәпләнгән ферма бар. Райондың генеральный планы буйынса Туйөмбәт перспективаһыҙ ауылдар иҫәбенә индерелгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, халыҡты күсереү яҡын араларҙа ғына күҙҙә тотолмай".

Ә мәҡәләлә һүҙ нимә тураһында бара ине һуң?

Күренекле совет яҙыусыһы, башҡорт әҙәбиәтендә тәүге трилогия авторы Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылы Туйөмбәткә "перспективаһыҙ" тигән тамға

һалынғанды белеп, ауылдың артабанғы яҙмышы тураһында борсолоп яҙылғайны бит ул! Яҙыусының тыуған ауылын һаҡлау, музей асыу, мәктәпте ҙурайтыу һәм артабан хатта ошо ауылда әҙәбиәт көндәре үткәреү, киләсәк быуынды матур традициялар нигеҙендә тәрбиәләү һәм... тәҡдимдәр, күрһәтмәләр буйынса түгел, ә заман талабына яраҡлаштырып, киләсәк хаҡында уйлап, башҡа күп төрлө саралар үткәреүҙе күҙҙә тотмаҫтармы, тигән уй менән яҙылғайны. Ҡинйә ауылының киләсәк яҙмышы тураһында ла ҡәнәғәтләндерерлек яуап булманы. Халыҡ депутаттарының Күмертау район Советы башҡарма комитеты рәйесе Р. Әбдрәшитов иптәштең яуабында: “2-се Ҡинйә ауылы перспективаһыҙ. Унда 27 өйҙә 91 генә кеше йәшәй, яртыһынан күбеһе пенсионер”, — тип кенә әйтелгән.

Ҡешене ауылда тотоу өсөн эш кәрәк, йәшәү өсөн шарт кәрәк. Ҡола яланда, әҙәм аяғы баҫмаған тайгаларҙа ҡалалар, поселоктар үҫеп сыға. Йәштәр унда барып, ең һыҙғанып эшкә тотона. Булмағанды булдырыу өсөн көрәш бара. Ә шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер урындарҙа барын юҡ итеп, ниндәйҙер уйланып еткерелмәгән йәки үтә тәрән уйланылған “төшөнсәләргә” таянып, тарихи яҡтан әһәмиәтле ауылдарға “перспективаһыҙ” тип тамға һалып ултырыусылар ҙа бар.

Ошо уҡ темаға икенсе мәҡәлә яҙылды. 1980 йылдың 17 февралендә баҫылып сыҡты.

*Бөгөнгөбөҙ һәм иртәгәһе көнөбөҙ хаҡына*

“Былтыр газетабыҙҙың 279-сы номерында “Бөгөнгөбөҙ һәм иртәгәһе көнөбөҙ хаҡына” тигән мәҡәлә баҫылғайны. Унда тарихи ваҡиғаларға бай булған, күренекле кешеләр тыуып үҫкән ауылдарҙы һаҡлап ҡалдырыу тураһында һүҙ барғайны. Атап әйткәндә, миҫал итеп күренекле яҙыусыбыҙ Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылы Туйөмбәт, Пугачевтың көрәштәше, яҡын кәңәшсеһе Ҡинйә Арыҫлановтың ауылы Ҡинйә телгә алынғайны. Уларға “перспективаһыҙ” тип тамға һалынып, бөтөү ҡурҡынысы аҫтында тороуҙары әйтеп үтелгәйне.

Был миҫалдар, әлбиттә, һүҙ ыңғайында ғына әйтеп үтелде. Әммә былдай ауылдар республикабыҙҙа аҙ түгел. Шуның өсөн дә мәҡәләне уҡығандан һуң, бәлки, башҡалар ҙа бер аҙ уйланырҙар, тигән өмөт бар ине.

Халыҡ депутаттарының Стәрлетамаҡ район Советы башҡарма комитеты председателе Ишморатов иптәштән мәҡәләгә ыңғай яуап алғас, күңелгә йылылыҡ та инеп ҡалғайны. Ул былай тип яҙған:

“Мәҡәләгеҙ колхоз идараһының һәм парткомының берләштерелгән, шулай уҡ район Советы башҡарма комитетының ултырыштарында тикшерелде. Йәмәғәт ойошмаларына, мәктәп директорҙарына ауыл, район, республиканың иң яҡшы традициялары нигеҙендә уҡыусыларҙы, колхоз комсомолецтарын тәрбиәләүҙе көсәйтергә тәҡдим ителде.

Айыусы ауылы эргәһендә Ашҡаҙар йылғаһының ағышын бороу эше 1980 йылға “Ишембайжилстрой” тресы планына индерелде, ә Айыусыла культура-көнкүреш объекттары төҙөү мәсьәләһе ун беренсе биш йыллыҡта ҡараласаҡ”.

Айыусы ауылы перспективалы ауылдар иҫәбендә булып, бөтә бәлә Ашҡаҙарҙа ғына икән, уны хәл итеү, әлбиттә, бөгөнгө көн өсөн генә түгел, киләһе быуындар өсөн дә изге эш булыр ине, сөнки, мәҡәләлә яҙып үтелгәнсә, ул бик бай традициялы ауыл.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге Төҙөлөш һәм архитектура эштәре идаралығы начальнигы Л.В.Хихлуха иптәштән дә яуап килде:

“Республикала ауылдар проектын хәл иткәндә, культура һәм архитектура ҡомартҡыларын табыу һәм һаҡлауға, тарихи нығынған традицияларға, тәбиғи

байлыҡҡа һәм халыҡ хужалығына һаҡсыл ҡарауға йүнәлтелгән эш алып барыла, — тип әйтелә унда. — Күп кенә ауылдарҙа мемориаль зоналар, парк һәм скверҙар булдырылды, тарихи ваҡиғаларҙы, күренекле кешеләр иҫтәлеген мәңгеләштереүсе һәйкәлдәр ҡуйылды, музейҙар асылды.

Миәкә районының Өршәкбаш-Ҡарамалы ауылында Советтар Союзы Геройы Миңнеғәли Ғөбәйҙуллинға — һәйкәл, Бөрө районының Осиновка поселогында Советтар Союзы Геройы Г.В.Овчинников һәм Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған 115 колхозсы хөрмәтенә обелиск ҡуйылды һәм башҡа шундай байтаҡ ҡына эш башҡарылды.

Хәҙер БАССР Госпланы, БАССР-ҙың Төҙөлөш эштәре буйынса дәүләт комитеты, халыҡ депутаттарының район Советтары башҡарма комитеттары менән берлектә перспективалы ауылдар исемлеген асыҡлау эше алып бара. Был мәсьәләне ҡарағанда, техник-экономик күрһәткестәр генә түгел, ә ауылдар үҫешенең тарихи аспекттары ла иҫәпкә алына".

Ауылдарҙың тарихи үҫеше иҫәпкә алына икән, ни өсөн редакцияға халыҡтан борсоулы хаттар килә һәм бай биографиялы ауылдарға "перспективаһыҙ" тигән тамға һалына, тигән һорау тыуа, әлбиттә.

Ошо урында күңелемә тынғылыҡ бирмәгән бер мәсьәлә буйынса уйланыуҙарымды әйтеп китәйем.

Ҡинйә ауылын ҡалдырыуға теше-тырнағы менән ҡаршы килгән Р. Әбдрәшитов (ауылда йыйылыштар үткәреүе, минең мәҡәләгә биргән яуабы, редакторыбыҙ А.Исмәғилевҡа: "Бураҡаеваның ике аяғының береһен баҫтырмайым районға", — тип шылтыратыуы, "Йәшлек" газетаһындағы мәҡәләләре буйынса фекер йөрөтөүҙән сығып әйтәм), Ҡинйәабыҙ ауылындағы музейҙың "Ҡунаҡтар фекере" китабына ошо ауылды алып ҡалыуҙы иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе тип иҫәпләүе тураһында яҙған. Ә инде үҙ ваҡытында Зәйнәб апайҙың тыуған ауылына "перспективаһыҙ" мөһөрө ҡуйҙырыусыларҙың береһе: "Апай ҙа апай", — тип, эргәһенән китмәй йөрөнө, уның хаҡында йылы тойғоло мәҡәләләр яҙа. Тарихи яҡтан әһәмиәтле ауылдарҙы "һаҡлап алып ҡалыуҙарын" оло мәртәбә һанап сығыштар яһайҙар. Ә ни өсөн тәүҙән үк килмәгән был аҡыл ул әһелдәргә? Ни өсөн мәҡәлә авторына шул тиклем ҡаршылыҡтар күрһәтелгән?

Шуның өсөн, йәшме, өлкәнме, — вазифалы урын биләгән, бер генә ҡултамғаһы менән оло эштәр башҡарырлыҡ дәрәжәгә эйә булған әһелдәргә әйтер һүҙем бар: ниндәй генә хәл иткес мәсьәлә ҡаралмаһын, бөгөнгөһөн түгел, иртәгеһен уйлап, халыҡ мәнфәғәтенән сығып, халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалып хәл итергә кәрәк. Аҙаҡ тәүбәгә ҡайтып, уңайһыҙланыу тойғоһо кисереү ҡиммәтерәккә төшә. Хаҡлыҡ юлы — халыҡ юлы ул. Халыҡ юлынан тайпылмау һәр саҡ үҙен аҡлай".

Әле телгә алынған икенсе мәҡәлә баҫылып сыҡҡас, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге Төҙөлөш һәм архитектура эштәре идаралығы начальнигы Л.В.Хихлуха менән һөйләшеү булды.

— Перспектив план төҙөгәндә, күрһәтмәләрҙе һеҙ етәкләгән идаралыҡ бирәме, әллә был мәсьәләне урындағы органдар хәл итәме?

— Беҙ планды халыҡ депутаттарының район Советтары башҡарма комитеттарының тәҡдимдәре нигеҙендә төҙөйбөҙ. Хәҙер был эшкә КПСС-тың район комитеттары ла йәлеп ителде, — тип яуап бирҙе Л.Хихлуха.

Мәҡәлә баҫылып сыҡҡас, Зәйнәб апайға ла (ул саҡта Мәскәүҙә ине) шылтыраттым. Бер аҙҙан хат килеп төштө.

“Мәрйәм!

Телефондан һөйләшкәс, гәзитәләрҙе эҙләй башланым. Таптым, уҡыным. Бик мөһим мәсьәләне бик оҫта, төплө һәм матур итеп күрһәтәһең. Ни өсөн мин уны күрмәгәнмен? Күрәһең, шул мәҡәлә аҫтында торған “Йылғалар төнөн һөйләшә” тигән йырҙы уҡығанмын да ырғытҡанмын.

Әйткәндәй, минең ауыл янында Ай-һай Мөрсәләй тигән бик матур ауыл бар ине. Унда ла мәктәп тә, йәштәр ҙә гөрләп тора ине. Был ауыл Бөйөк Ватан һуғышында бына тигән геройҙарын биреп дан алды. Күкрәген ордендар менән тултырып, Мәскәү янынан Берлинға хәтле данлы һуғыш юлы үткән Суфый Суфиянов — Советтар Союзы Геройы — әле лә шул ауылда йәшәп ята... “Славные сыны Башкирии” тигән йыйынтыҡта (II том) минең мәҡәләм бар Суфиянов хаҡында! “Ҡыҙыл таң”да ла сыҡҡайны. “Егет кешенең йөрәгендә эйәрле ат ята” тигән. Минең уға ҡарата әйткән һүҙемде ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең әҫәрҙәренә исем итеп ҡушып бөттөләр... Тимәк, насар очерк булмағандыр. Хәйер, шундай боец хаҡында насар яҙып буламы ни? Бына шул Герой йәшәгән, унан башҡа күпме батыр боецтар биргән Ай-һай Мөрсәләй ҙә бөтөүгә юл тотҡан. Колхоз ваҡытында был ауылдар сәскә ата ине. Совхоз булғас, булған яҡшы йорттарҙы күсереп алып бөткәндәр. Ә ул ауыл тирәһендәге тәбиғәт ниндәй ине! Романдарҙа ғына ҡалды инде улар... тиҙәр хәҙер. Мин үҙем ҡайтып күрә алғаным юҡ. Бер саҡ шул Оло Эйек буйындағы бөтөүгә йөҙ тотҡан ауылдарҙы берләштереп (Ай-һай Мөрсәләй, Бире ауылы, Са йыр, Сирбай һ.б.), Туйөмбәткә йыйып, унда һис юғы 8 йыллыҡ мәктәп булдырырға, тип юллап йөрөп ҡарағайным да, күтәреп алыусы булманы. Ә бит Туйөмбәт, Ай-һай балалары яҙын-көҙөн ташҡан Оло Эйек аша кәмә менән сығып уҡырға йөрөргә мәжбүр ителгәндәр. Шулай булғас, ул ауылдарҙа кем торһон?!

Мәрйәм, һин тәбиғәтте һаҡлау, кешеләр хаҡында уйлау тигән бик изге темаға тотондоң. Изге эшкә тотонорға йәнең дә, йөрәгең дә, намыҫың да тап килеп тора. Уңыш теләйем! Шулай дауам ит. Сәләм менән З.Биишева (ҡултамға)”.

25.02.1980. Мәскәү.

Зәйнәб апай түҙмәне, Мәскәүҙән ҡайтты. Беҙ Зекериә Шәрәфетдин улы Аҡназаровҡа (1962—1986 йылдарҙа БАССР Министрҙар Советы рәйесе) индек.

— Уҡыным, башҡортта һинең һымаҡ тағы ун ҡатын булһа, йәшәрбеҙ, — тине Зекериә Шәрәфетдин улы, ҡарашын миңә төбәп.

Зәйнәб апай:

— Һылыуым әлегә бер үҙе лә бирешмәҫ, Аҡназаров кеүек таяныстары булһа. Ана, Рабиға Ҡушаева бер үҙе башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының хоҡуғын яҡлап сыҡҡан.

— Тотош съезд ҡарарын үҙгәрттергән, — тип өҫтәне Зекериә ағай. — Зәйнәб апай, аңланым тел төбөгөҙҙө. Мәсьәләне һис һүҙһеҙ ыңғай хәл итербеҙ. Ир һүҙе. Ә Арыҫлановтарҙың берәйһе бармы икән Өфөлә? — тип һораны.

— Альберт Арыҫланов тигән егет бар. Инженер. Арыҫлановтар нәҫеленән. Ауыл хужалығы институтында Нуранбәк Арыҫланов эшләй. Ғалим. Уҡыта, — тинем мин.

— Рәхмәт. Мин уларҙы табырмын. Килеп, бик яҡшы эшләнегеҙ. Ауылдарҙа ике ҡатлы йорттар һалдырып, имеш, ҡала шарттары тыуҙырып, йәштәрҙе ҡалдырырға маташыу тәжрибәһе барып сыҡманы. Хәҙер бер ҡатлы өйҙәр һалдырып, йәштәрҙе ҡайтарыу яғын ҡарамаҡсыбыҙ. Мәскәү байтаҡ ҡына аҡса бүлә. Башҡортостанда өс ауылды ҙурайтырға иҫәп тотабыҙ. Рус, татар ауылдары билдәләнде. Башҡорт

ауылы мәсьәләһен уйлаған мәлгә тап килдегеҙ. Тағы бер тапҡыр рәхмәт һеҙгә, — тип, кабинетының ишегенә тиклем оҙата килеп, ишекте үҙе асып хушлашып ҡалды. (Аҡназаров иҫтәлектәр китабында Ҡинйә ауылын һаҡлап алып ҡалыуҙы хаҡлы рәүештә иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе тип яҙа).

Боҙ ҡуҙғалды. Ҡинйә ауылында йәшәүсе Хәмитова Мәфтуха апайҙан хат килде. “Рәхмәт, Мәрйәм һылыу. Рәхмәт, Диҡҡәт ҡусты. Мең рәхмәт. Алып ҡалдығыҙ бит Ҡинйәабыҙҙы үлемдән. Бына уның туғайында үҫкән сәскәләрҙе һалам. Беҙҙең ҡыуанысыбыҙ тип ҡабул итегеҙ. Яңыраҡ Аҡназаров унлаған министры менән килеп китте. Хатта зыяратҡа ла барып ҡаранылар. Өйҙәргә инеп сыҡтылар. Илле өй, мәктәп һалдырабыҙ ауылға, ситкә киткәндәр ҡайтһындар, балаларығыҙға яҙығыҙ, тине, рәхмәт төшкөрө. Әбдрәшитов та килгән булған эйәреп, янынан китмәй”.

(Мәфтуха апай ебәргән туғай сәскәләре миндә һаман да һаҡлана әле).

Зәйнәб апайҙың тыуған яғынан да ҡыуаныслы хәбәр килде. Яуап газетала “Беҙгә яуап килде” тигән рубрикала баҫылып сыҡты.

Газета ошондай баш аҫтында бер нисә тапҡыр сығыш яһағайны һәм тарихи ваҡиғаларға бай булған, күренекле кешеләр йәшәгән ауылдарҙы һаҡлап ҡалдырыу, республиканың социаль үҫеше буйынса комплекслы планын төҙөгәндә дөйөм проект буйынса ғына хәл итмәҫкә, ә ауылдарҙың биографияһын иҫәпкә алырға кәрәк тигән фекер әйткәйне. Ошо уҡ мәҡәләләрҙә күренекле яҙыусыбыҙ, Салауат Юлаев премияһы лауреты Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылы Туйөмбәттең перспективаһыҙ ауылдар иҫәбенә индерелеүе хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатылғайны.

Редакцияға шатлыҡлы хәбәр килде. “Ауылдар үҫеше планын раҫлаған ваҡытта Күгәрсен районының Туйөмбәт ауылы перспектив ауылдар иҫәбенә индерелде”, — тип яуап бирҙе халыҡ депутаттарының Күгәрсен район Советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары А.Степкин иптәш.

Ярты йылға яҡын барған көрәш һөҙөмтәһе булған был яуапты шунда уҡ телефондан Зәйнәб апайға уҡып ишеттерҙем. Әлбиттә, шатлыҡтың сиге булманы. Ул шунда уҡ Аҡназаров ағайға шылтыратып, рәхмәт әйткән.

— Урындағылар ҡарап еткермәгән бит. Үҙебеҙҙең егеттәребеҙгә иғтибарлыраҡ булырға кәрәк ине бындай мәсьәләлә. Артабан эш яйланыр, — тигән ул.

Зәйнәб апай бик ныҡ ҡыуанды. “Тыуған ауылһыҙ ҡалыу ҙа етемлек бит ул, һылыу. Һиңә рәхмәт. Ауылдаштарым да онотмаҫ был изгелекте”, — тине. Шул көндән башлап ауылға ҡайтып, өй һалдырыу тураһында хыяллана башланы. Күҙҙәренән нурҙар сәсеп, ҡараштарын үткәндәргә төбәп, уйсанланып китеп хыяллана ине ул.

— Һылыу, быйыл нисек булһа ла барайыҡ ауылға. Бынан һуң бармай ярамай. Һылыу, бәлки ауылда берәй өй һалдырыу яғын да уйларға кәрәктер. Өфөләге фатирҙың иҙәне һыуыҡ бит, өшөү үҙәккә үтә. Ауыл өйөндә мейес яғып тороп ебәрһәң... Бәлки, район етәкселегे ыҡсым ғына итеп өй һалып бирһә, артабан музей итер ҙә ҡуйырҙар ине. Мин мәңгелек түгел бит. Нисек уйлайһың, һылыу? Бер генә лә ышанысым ҡалмағайны инде. Зекериә Аҡназаров та хәл итә алманымы икән, Мәскәү шулай ныҡ торамы икән, тип уйлай башлағайным, тәки осона сыҡтың бит, һылыу. Инде ошо хәбәр раҫ булып, ауылымды күсермәһәләр, өй һалдырыу мәсьәләһен дә ҡуҙғатырбыҙ, һылыу. Әйләнгән һайын Мәскәүгә сығып китмәҫ инем. Ауылыма ҡайтыр ҙа төшөр инем, — тип, ҡыуанды.

## Ауылға, ауылға...

Бер көнө, Диҡҡәт тә, мин дә отпуск алып тәүге генә көн өйҙә булған саҡта, ишек шаҡыныйлар, асып ҡараһам, бер бала тора.

— Вас там ждет писательница Зайнаб Биишева. Она сказала, что лифт не работает, на шестой этаж ей трудно подниматься.

Диҡҡәт тә, мин дә аптырап киттек. Зәйнәб апайҙың бер ваҡытта ла беҙгә килгәне юҡ ине. Һәр ваҡыт үҙебеҙ генә бара торғайныҡ. Дәрәжәһе менән генә түгел, йәше яғынан да өлкән кешенең ҡапыл ғына былайтып килеп сығыуы тиктәҫкә түгелдер, тип уйланым да апай янына ашыҡтым.

— Такси менән килдем дә еттем. Алтынсы ҡатҡа ла күтәреләһеңме, тигәйнем, уныһын булдырып булмаҫ, тигән була. Шаяртҡанды аңлай үҙе.

Зәйнәб апайҙың күтәренке кәйефе минең бар шөбһәләремде юҡҡа сығарҙы. Тимәк, барыһы ла яҡшы. Уғаса Диҡҡәт ашығып килеп сыҡты. Диҡҡәттең бар уйлағаны, кисергәне йөҙөнә бәреп сыға ине. Бер ниндәй кисерешен дә йәшерә белмәй торғайны. Эскерһеҙ, ихлас кешеләрҙең шулай булалыр. Зәйнәб апай уның борсоулы йөҙөнән барыһын да аңланы һәм тынысландырырға ашыҡты.

— Диҡҡәт мырҙам, борсолма. Зәйнәб апайың имен-аман. Ә бына төп йомошом һиндә әле минең.

— Тыңлайым, Зәйнәб апай.

— Тыңлауын тыңларһың да, тик риза булырһыңмы икән? Мырҙам, Мәрйәмде яратҡанымды беләһең. Бөтөн серем уға һыя. Һыйыу ғына түгел, һыуға ырғытылған таш кеүек бата ла ҡуя. Былтырғы һымаҡ, берәй өс көнгә һылыуым менән тыуған яҡтарға ҡайтып килһәк, тигәйнем дә. Ни әйтереңде тоям — балалар мәсьәләһе. Ҡәйнәң менән ҡайның ҡарап тора алмаҫмы, тип әйтеүем. Үтәй алмаҫлыҡ үтенес тә түгел, мырҙам.

— Зәйнәб апай, һеҙҙең үтенесте кире ҡағыуҙан да ауыры юҡ, әлбиттә. Балаларҙы бит мин бер кемгә лә ышанмайым. Уларҙы Мәрйәм үҙе генә ҡарай. Былтыр ҙа, һеҙҙең менән ауыл яғына йөрөп килгән саҡта, аптыранып бөттөләр. Ҡәйнәм дә йәш түгел. Шул ғына сәбәп.

— Бәләкәйе Зөһрә бит әле. Уға нисә йәш тулды?

— Ете йәш тула.

— Өс көнгә түҙерлек бит, мырҙам. Ҡайынбикәң дә ҡарашһа...

Зәйнәб апай бөтөнөһөн дә белеп, алдан хәл ителгән кеүек һөйләшкәс, Диҡҡәт миңә шикле ҡараш ташлап ҡуйҙы. Зәйнәб апай быны шунда уҡ һиҙҙе.

— Юҡ, мырҙам, Мәрйәм менән был хаҡта һөйләшмәгәнбеҙ. Мин ҡайныҡәйнәңде беләм дә инде. Яҙыусылар дачаһында булып киттеләр. Беҙҙең баҡсаға ла инделәр. Минең күршелә генә бит ҡарауылсы өйө. Ҡайныңды ҡарауылсы итеп ҡоҙалап йөрөгәйнек. Ҡайның ҡарауыл булһа, шунда йәшәһәләр, ҡәйнәң менән көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп йөрөһәк, тип уйлағайным. Бер-ике йыл эшләһә, ҡаланан фатир бирергә тейештәр ине. Ҡайның риза булманы. Бик шуҡ, йор һүҙле ҡайның бар икән. “Беҙ Өфөгә яҙыусыларҙы ҡарауыллап ятыр өсөн күсеп килмәнек, балаларыбыҙ тип килдек”, — ти. Ярай, уныһы инде... үткән эштән төш яҡшы. Бөгөнгөһөн хәл итәйек, мырҙам.

Ун өс йәшлек Илгизәрҙе үҙебеҙ менән алып, өс ҡыҙыҡайҙы әсәйемдәргә ҡалдырып, юлға сыҡтыҡ. Зәйнәб апайҙың ҡапыл ғына ашыҡтырып ауылға димләүенең тағы бер сәбәбе булған — Мәскәүҙән студент Павел Илышев килеп төшкән. Ул Мәскәүҙә кинематография институтында уҡый икән. Кафедра мөдире, профессор Михаил Александрович Богданов уға диплом эше итеп

Зәйнәб Биишеваның “Яҡтыға” трилогияһын биргән. М.А.Богдановтың үҙенең диплом эше Лев Толстойҙың “Война и мир” романы буйынса яҙылған. Зәйнәб апайҙың трилогияһында ла халыҡ тормошоноң киң ҡоласлы һәм төрлө яҡлы һүрәтләнгәнен, әҫәрҙең тәрән мәғәнәле булыуын тойғандыр М.Богданов. Шуға ла үҙ шәкертенә тап ошо әҫәрҙе тәҡдим иткәндер.

* * *

Суфиғәли ағай менән Сабира апай ғәжәп ҡунаҡсыл ҡаршыланы беҙҙе.

— Рәхмәт, егеттәр, тура беҙгә алып килгәнегеҙгә. Юғиһә, әллә ҡайҙа ала ла китәләр апайымды, мин торам да ҡалам, — тине Суфиғәли ағай беҙҙе алып килеүсе егеттәргә.

— Был юлы, Суфиғәли мырҙам, рәсми осрашыуҙар үткәрмәйбеҙ. Алдан уҡ әйтеп ҡуйҙым, бер кемгә лә хәбәр итмәгеҙ, тинем. Күңелем һөйгән ауылдаштарым менән осрашып, йәнем тартылып торған ерҙәрҙән йөрөп ҡайтҡым килә. Шуға бына мырҙаларҙы ла, иртәгә генә килеп алырһығыҙ, тип, ҡайтырға димләп торам әле. Йәш егет үҙенең эше менән килде. Бөгөн Мораҡта йоҡлай ҙа, тағы осрашабыҙ.

— Күптән кәрәк ине, Зәйнәб апай. Бик дөрөҫ эшләгәнһең. Рәхәтләнеп ҡунаҡ булғаның да юҡ бит. Кеше тыуған яғына рәсми ҡунаҡ булып ҡына ҡайтмай инде.

— Күптән кәрәк ине лә бит. Уныһын үҙем дә беләм дә ул. Мин бит яңғыҙым йөрөй алмайым. Ир яҙыусыларҙы эйәртеп йөрөгөм килмәй. Мәрйәм һылыуымдың ваҡыты наҡыҫ, балалары бәләкәй. Әле лә Диҡҡәт ҡустынан ике генә көнгә тип һорап алып киттем. Былтыр ҙа ашыҡ-бошоҡ ҡына йөрөп әйләнгәйнек.

— Әйҙәгеҙ, юлдан сарсап килгәнһегеҙҙер. Сәй эсәйек. Ҡулйыуғысыбыҙ бында, — тине Сабира апай әйҙүкләп.

— Беҙ сәйләп тормайыҡ, ҡайтайыҡ, — тип, баш тартып ҡаранылар оҙатыусылар.

— Боҫло ашты бора баҫма, тигәндәр боронғолар. Әҙер табындан баш тартмағыҙ, — тип, Зәйнәб апай уларҙы ла бергә алып инде.

Ҡисен беҙ Ай-һай Мөрсәләйҙең элекке урамдары аша үттек, өй урындарында булдыҡ.

— Заманында ҙур ауыл ине бит ул. Туйөмбәттән бында килеп уҡый торғайнылар, — тип, ҡапыл күңеле төшөп китте апайҙың. Өҫтәл янында ошо хаҡта һөйләшеү башланды.

— Әле һылыуым менән ауыл урамынан йөрөп килдек. Мейес мөрйәләре генә һерәйешеп ултыра, эс бошороп, — тине Зәйнәб апай ҙа, уфтанып. — Минең ауылымды ла шул яҙмыш көтә. Суфиғәли мырҙам, медпунктты Туйөмбәткә күсертһәң, исмаһам, Туйөмбәт һаҡланыр ине, — тине Зәйнәб апай.

— Ай-һай Мөрсәләй барыбер бөткән, тип әйтмәксеһеңдер инде, апай, — тине Суфиғәли ағай тәрәндән сыҡҡан әрнеүле тауыш менән. Шунан ауыр көрһөнөп алды.

Суфиғәли Хажиғәли улы Советтар Союзы Геройы булғанлыҡтан, даими рәүештә медицина хеҙмәтләндереүе менән тәьмин ителергә тейеш. Шуның өсөн дүрт-биш кенә өйө ҡалған Ай-һай Мөрсәләйҙә медпункт тоталар ине. Ә эргәлә генә урынлашҡан Туйөмбәттән (ул саҡта утыҙ туғыҙ өйлө, йөҙ утыҙ кеше йәшәгән, башланғыс мәктәбе, биш йөҙ баш һыйыр малы аҫыралған фермаһы булған ауылдан) медпункт күсереп алып кителгән. Ауылды күсермәү тураһында ыңғай яуапҡа ныҡ шатланһа ла, Ай-һай яҙмышын күргәс, икеләнә, ауыл яҙмышы өсөн тағы борсола башланы Зәйнәб апай. Халҡыбыҙҙың иң күренекле, иң уҡымлы яҙыусыһы менән илем, ерем, телем, халҡым, ауылым, тип, үҙен аямай яу ҡырында алышып,

күкрәгенә Герой йондоҙо ҡаҙап ҡайтҡан ир уҙаманы ер йөҙөнән юҡ ителеүгә дусар булған ауылдарының әсе яҙмышы тураһында әсенеп-әсенеп һөйләшә, был афәттән ҡотолоу, ауылдарын йолоп алып ҡалыу тураһында баш вата башланы.

— Урындағылар үҙҙәре хәл итәләр, тигәндәр Госпланда. Мәрйәм һылыуым Лев Васильевич Хихлуханан белешкән. Ауылымды ҡалдырырға иҫәптәре булһа, тәүҙән үк бөтөрөү яғын ҡарамаҫтар ине. Әле һинең ауылыңды күргәс, ышанысым һүрелде лә ҡуйҙы шул, Суфиғәли мырҙам. Герой йәшәп ятҡан ауылды ла бынауындай хәлгә килтергәсен... Үҙҙәре "апай ҙа апай" тип өлтөлдәп торған булалар, берҙән-бер яҙыусы апайҙарының ауылы тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр. Ауылымды бөтөрөү тураһында урында хәл иткәндәр бит, мырҙам...

Суфиғәли ағай бер ни өндәшмәй оҙаҡ ҡына ултырҙы ла:

— Шула-а-а-йүмы ни-и-и... — тип һуҙҙы. Шунан Зәйнәб апайға ҡарап алды ла уйсан йөҙ менән дауам итте. — Зәйнәб апай, бына, Мәрйәм һылыу ҙа, Илгизәр улым да тыңлаһын, бер ваҡиға һөйләйем. Әлбиттә, һуғыш ваҡиғаһы.

Беҙгә Днестр йылғаһы аша сығырға приказ булды. Минең төркөмдә яугирҙар бишәү генә ҡалған. Ошо биш кеше йылға аша сығасаҡ танкыларҙы ҡаршы яҡ һөжүменән һаҡларға тейешбеҙ. Самолеттарҙың килере икеле. Хәбәрләшеү өҙөлөп тора, тинеләр. Йылға буйы ҡола ялан урын. Ышыҡланыр әмәл юҡ. Йылғаға арҡыры ауған ҙур бер ағас ҡына ята. Тамыры тырпайып тора, ышыҡланыр өсөн бик уңайлы. Тик барып етеү өсөн байтаҡ ара бар. Мин яугирҙарҙы алып, ипле генә шыуып киттем. Ғәжәп, ут асыусы булманы. "Абайламайҙармы икән, әллә берәй этлекме?" — тигән һорау борсоно. Ҡайһылай ғына булмаһын, беҙ йылға аша кисеү янына килеп еттек. Танкылар ошо кисеү аша сығырға тейеш теге яҡ ярға. Бер саҡ бер танк йылға аша беҙҙең яҡҡа ыңғайланы. Тапҡырға ғына килеп еткәйне, граната елләнек. Танк кире боролдо. Ипләп кенә боҫоп ҡарайбыҙ: немецтар ағастың теге яҡ башы эргәһендә ниҙер мыштыр-мыштыр киләләр. Өҫтәмә көс кенә килеп етһә ярар ине, хәлебеҙ оборона тотоп ятырлыҡ та түгел. Урынлашыуын һәйбәт урынлаштыҡ та ул, тип һөйләшәбеҙ. Бер ваҡыт ағас ҡаты ғына һелкенеп ҡуйҙы. Был ни хәл, тип аптырап киттек. Ағас тағы һелкенде. Беҙ дошман хәйләһен шунда ғына аңлап алдыҡ: улар ағастың теге яҡ башына трост бәйләп, танк менән тартып сығарып, беҙҙе йә юҡ итмәксе, йә әсир төшөрмәксе булғандар. Беҙ кәңәш-төңәш итештек тә бер-беребеҙ менән хушлаштыҡ, гранаталарыбыҙҙы ҡулға тотоп алдыҡ. Бирелеү юҡ, ағасҡа һағып, һыуланмай ғына теге яҡ ярға сығып етергә, ҡул күтәрергә, шунан ҡап урталарында шартлатырға, тип әҙерләндек. Шулай ҙа үлге килмәй. "Әгәр ошонан иҫән ҡалһам, тыуған тупрағымды ҡосоп ятып йән бирһәм дә риза булыр инем. Ай-һайымдан бер ҡайҙа ла китмәҫ инем", — тинем.

Ағас аҡрын ғына шыуа. Ботаҡтары ҡамасаулаймы, әллә беҙҙең йөрәктәргә аҡрынлап ҡурҡыу һалалармы — билдәһеҙ. Фашистарҙың был холоҡтары ла билдәле ине беҙгә. Улар яралы һалдаттарҙы танк менән ҡыуып йөрөп иҙеп китәләр ине. Бесәй сысҡанды уйнатҡан кеүек был йыртҡыслыҡтары үҙҙәренә йыуаныс биргәндер. Әле лә бөтәбеҙҙе ҡырып һалырға бер граната етә ине. Юҡ. Уларға ҡыҙығыраҡ үлем кәрәк. Ағас аҡрын ғына шыуыша. Беҙ ышыҡланып маташҡан булабыҙ. Бына бер саҡ йылғаға индек. "Бөтөүебеҙ ошолор",— тип уйланыҡ. Шулай ҙа ағас тамырына һаҡтыҡ та, һыуланмаҫҡа тырышып шыуабыҙ. "Тереләй бирелмәйәсәкбеҙ. Бер нисәһен булһа ла дөмөктөрөп үләсәкбеҙ!" Ағасты тартып сығарҙылар. Беҙ танкыға тағы граната елләнек. Танк шартланы. Әммә уның эсенән немецтар һикерешеп килеп сыҡты. Ырғытырлыҡ гранаталар

юҡ. Ҡул һуғышы башланды. Фронтта иң ҡурҡынысы — ҡул һуғышы. Бындай тетрәндергес, үлем менән йәшәү араһында ҡалған минуттарыбыҙ күп булды, әммә был тиклем үк көсөргәнешле минуттарҙы хәтерләмәйем. Шунда сәстәрем ағарып сыҡты. Утыҙ йәшем дә тулмаç элек минең сал сәстәрем баш тулы ине.

Немецты киноларҙа ғына иçәр тип төшөрәләр. Иçәр дошман менән һуғыш шул тиклем ҡорбандарға килтерәме һуң? Улар бик оçта һуғыштылар. Бик әҙерлекле инеләр. Тик үҙ ерҙәрендә һуғышмауҙары, баçҡынсы-фашист булыуҙары ғына көс-ҡеүәттәренә ҡырын һуҡты. Бер саҡ айпашып йөрөгән ерҙә былар ҡаса башланы. Баҡһаң, өçтә беҙҙең самолеттар күренә икән. Ә аçта — танкыларыбыҙ. Ҡурҡыуҙан саҡ ярылмай ҡалған йөрәктәр шатлыҡтан шартлай яҙҙы. Мин ҡыуанысымдан тын ала алмай торам хатта. “Ауылым, Сабирам!” тип өҙәләнеүҙәрем ғүмеремде һаҡлап алып ҡалғандыр, тип уйлайым. Үпкәләмә, Зәйнәб апай, минең тамырым ошонда. Ошонан айырылһам, мин һулырмын кеүек. Өфөлә лә фатир бирҙеләр. Барып йәшәп ҡараныҡ. Мейес яғырға, утын әҙерләргә түгел. Барыһы ла өйҙә. Юҡ инде, сыҙар әмәл юҡ. Ауылды һағынам. Ҡайтып киттем. Табандарым менән ҡуша йәбешкәнмен мин Айһайыма, Зәйнәб апай. Бында һыу килтереүе лә, Сабираға мейес яғып донъя көтөүе лә, мал аçырауы ла еңел түгел. Тик минең бер ҡайҙа ла киткем килмәй. Ошо ҙур бәхет минең өсөн, Зәйнәб апай.

Республикабыҙ ғына түгел, тотош илебеҙ кимәлендә абруйлы кешеләребеҙҙең тыуған ауылдарының ер йөҙөнән юҡ ителеү кимәлендә булыуы үҙәк өҙгөс хәҡиҡәт ине. Суфиғәли ағайҙың күҙҙәренә йәш алып һуғыш ваҡиғаларын иçкә төшөрөүе, Зәйнәб апайҙың ҡулъяулығын күҙенән алмай тыңлауы, ире һуғышты иçкә алған һайын күҙ йәштәрен тыя алмай тыңлаған Сабира апайҙың яулығы менән йөҙөн ҡаплап ипле генә илап ултырыуы тетрәндергес ине. Әйтергә кәрәк, Зәйнәб апай күп кенә ҡайғылар үткәрҙе, әммә мин уның күҙҙәрендә йәш күрмәнем. Әле ул да илай ине.

Суфиғәли ағай һөйләп бөттө лә:

— Үпкәләмә, Зәйнәб апай, мин ошонда йән бирермен. Ә кешеләргә тыуған ауылдары ғәзиз түгелме икән ни? Ни эшләп ташлап китеп бөттөләр икән? Ғибаҙулла ағай Биишев ауыл һайын тигәндәй йөрөп, ауыл һаҡланһа, башҡорт һаҡланыр, ауылығыҙҙан китмәгеҙ, тип өгөтләп йөрөй торғайны. Һуңғы йылдарҙа ғына нисәмә ауыл юҡҡа сыҡты. Ә Туйөмбәтте юҡҡа сығармау тураһында, ни, бына, Мәрйәм һылыу эште бик ҙурҙан башлаған бит. Хихлухаға ла, Аҡназаровҡа ла барып еткәс, шәп инде. Берәй нисек хәл итерҙәр. Ауылды һаҡлау һинең өсөн генә түгел, халыҡ өсөн, әҙәбиәт өсөн кәрәк бит, — тине.

Зәйнәб апай ауыр итеп көрһөндө лә:

— Беҙҙең көрәштәр юҡҡа сыҡмаһа ярар ине лә, — тине.

“Совет Башҡортостаны” гәзитендә, Туйөмбәт ауылы яҙмышы ыңғай хәл ителер, тигән яуап килгәндән һуң да Күгәрсен районына килергә, Туйөмбәт ауылын күрергә, район етәкселәре менән Зәйнәб апайға өй һалдырыу мәсьәләһен ныҡлап һөйләшергә кәрәк булды. Шул саҡта бер ыңғайҙан Суфиғәли ағайҙарға инеп сыҡтым. Ҡыш ине. Йортто тотош көрт баçҡан. Ҡапҡа яғы ғына матур итеп һуҡмаҡ һалынып көрәлгән, һарайға ла һуҡмаҡ таҙартылған. Сабира апай туҡмас баçып йөрөй. Суфиғәли ағай бәләкәй санаға фляга ултыртып, һыуҙан ҡайтып килә. Ул ҡаршы килеп ихлас күреште лә:

— Тәки алып ҡалдың бит Зәйнәб апайҙың ауылын, — тине, ҡыуанысын уртаҡлашып. — Музей һалырға уйлайҙар хәҙер. Мораҡта ул хаҡта ишетеп,

ҡыуанып ҡайттым. Ҙур эш башҡарҙың, һылыу, — тип, атайҙарса арҡамдан ҡағып һөйөп алды. — Бына ҡалай ҙур бәхет. Йәштәр ҙә ҡайта башлар. Мәктәбе булһа, ауыл бөтмәй ул. Рәхмәт, һылыу. Ҡинйәне лә күсермәйҙәр, ти. Һинең мәҡәләңдән һуң Аҡназаров үҙе барып ҡайтҡан икән. Ҡалай бәхетле иттең ул ауыл кешеләрен дә, — тине ағай.

Һәр кем үҙе аңлағанса, үҙе теләгәнсә, үҙе уйлағанса бәхетле. Ситтән ҡарап торһаң, бөткән ауыл, аралашыр-һөйләшер кеше юҡ. Малға эсереү, йыуыныу-бешеренеү өсөн һыу байтаҡ кәрәк. Утын киҫергә, мейес яғырға, ҡар көрәргә. Балалары ярҙам итһә лә, көндәлек тормоштоң көндәлек мәшәҡәте күп. Ә улар үҙҙәрен бәхетле тоя. Әкиәттәге “йәшәгән, ти, әбей менән бабай” тигән кеүек. Бер-береһенә шул тиклем яғымлы, һөйөп кенә ҡарап, ипле генә һөйләшеп, ярты ауыҙ һүҙҙән аңлашып, һәүетемсә генә донъя көтәләр ине. Суфиғәли Суфияновтың хыялы, маҡсаты тормошҡа ашҡан. “Ауылды һаҡлай алғанса һаҡлайым әле. Бәлки, йәштәр ҡайта башлар”, — тине ул ошо көрешеүҙә.

(Суфиғәли Суфиянов ауылында китте фани донъянан. Ҡәбере ауыл зыяратында).

## Зәйнәб апайҙың ауылды һағыныуы, ҡайтҡыһы килеүе

Зәйнәб апай, ауылға ҡайтып йәшәргә, тигән хыялын ташламаны. Икеләнеп киткән саҡтары булды, әммә хыялы көслө ине. “Туйөмбәтте, ысынлап та, яңынан төҙөй башлаһалар, ҙурайтһалар, ҡайҙа ла инде, ҡағыҙҙа ғына тороп ҡалып, ауыл тергеҙелмәһә, музей тигәнебеҙ һерәйеп ултырып ҡалһа, кем килеп йөрөһөн дә, кем бағып торһон инде? Ә Исем ауылы минең бала сағымдағы ауыр хәтирәләр менән бәйле. Мораҡта булһа, бәлки Әҙәбиәт музейы итеп ебәргәндә, ҡандай шәп булыр ине...” — тип, икеләнеүле уйҙар менән ҡайтҡайны ла, район етәкселеге ауылдың киләсәге тураһында ҙур пландар булыуы тураһында һөйләп, ышандырғас, ныҡлы ҡарар менән өй урыны һайларға Туйөмбәткә киттек.

Элек үҙҙәре йәшәгән өй урынында икенсе хужалар йорт һалғайны. “Исем” совхозының партком секретары Ғилметдин Яппаров, Суфиғәли ағай менән бергә байтаҡ ҡына йөрөгәндән һуң, бик күркәм бер урынды һайлап, мәсьәләне артабан хәл итеүҙе был уҙамандарға йөкмәтеп, Өфөгә ҡайтып киттек. Туйөмбәттән ҡайтышлай, Исемгә туҡталып, Ғилметдин Яппаров тәҡдиме буйынса боронғо бер йортто ҡараныҡ. Төҙөлөшө буйынса ғәжәп үҙенсәлекле бер йорт ине ул. Тирмә сүрәтендә, үҙе бүрәнәнән, тәҙрәләре дүрт тарафҡа ла уйылған. Зәйнәб апайға оҡшаны был йорт. “Бына бит боронғоса тирмәгә оҡшатып төҙөлгән йорт. Архитекторға әллә ни уйларға ла түгел. Алдағы көндә музей итеп ҡалдырылһа ла матур, үҙенсәлекле”, — тине Зәйнәб апай. (Шуныһы ғәжәп, Туйөмбәттә архитекторҙар Рудоль Әүсәхов менән Наил Ғәлиевтарҙың проекты буйынса төҙөлгән йорт тап тирмә рәүешендә ҡалҡып сыҡты. Ә бит улар яҙыусының хыялы тураһында хәбәрҙәр түгел ине).

Зәйнәб апай тағы Мәскәүгә китте һәм хыялдар, икеләнеүҙәр тулы хаттар яҙа башланы. Хат яҙып ебәрә лә артынса уҡ телефондан шылтырата. “Һылыу, ауылда өй һалып бирһәләр, кем менән йәшәрмен икән? Бергәләшеп күсер ҙә ҡайтыр инек. Балаларың үҙаллы түгел шул әле, бәләкәйҙәр...”

Ни эшләп шул тиклем ҡайтҡыһы килә икән, тип тә уйлап ҡуйғылай инем. Ауылын, халҡын, тәбиғәтен сикһеҙ һөйөүе, ауыҙ тултырып туған телдә, үҙ һөйләшендә аралашҡыһы килеүе, романдарында һүрәтләгән тәбиғәт ҡосағында йәшәгеһе килеүе арҡаһында ҡалала толҡа тапмағандыр. Тәбиғәттә, бигерәк тә ауылына ҡайтҡан саҡтарҙа, Ейәнсура районының Һүрәм, Ямашлы, Өҫкәлек

буйҙарында булғанда ла ул бөтөнләй үҙгәреп китә торғайны. Күҙҙәрендәге моң тарала, йөҙө балҡый, хәрәкәттәре етеҙләнә. “Аяҡтарым тупраҡҡа баҫһа, үлән кисеп атлай башлаһам, һыҙланыуҙы ла онотоп ебәрәм мин”, — тиер ине үҙе. Бер ҡайтҡаныбыҙҙа Ейәнсураның Үрген ауылында беҙҙе йырсы Венер Абдуллиндарҙың йортона ҡунаҡҡа саҡырҙылар. Ул саҡта Венер йырсы булып танылмағайны әле, йәш ине. Табында уның әсәһе йырланы. Ифрат та моңло ине уның тауышы. Зәйнәб апай: “Күпме талант ауыл халҡында!” — тип ғәжәпкә ҡалып тыңланы уны. “Заветы Ильича” колхозына ҡарай ине Үрген ауылы. Колхоз рәйесе Йомалин да дәртләнеп китеп бейергә төштө. Һомғол буйлы, ғәжәп күркәм ир уҙаманы ине ул. Шул тиклем дәртле итеп бейене, Зәйнәб апай аптырап ҡарап ултырҙы ла:

— Анау тиклем кәүҙәне шулай еңел генә итеп, оҫта бейетеү өсөн ул аяҡтарыңа ҡандай көс кәрәк! — тине.

— Көнө буйы колхоз баҫыуҙарында күнекмә ала бит улар, — тип көлдө Йомалин.

— Көнө буйы баҫыуҙа йүгертеп, кис бынауындай етеҙлек менән бейетә алған аяҡтарыңа рәхмәт! — тип көлдөрөп алды табындағыларҙы Зәйнәб апай.

Ошондай матур күңелле кешеләр менән осрашҡандан һуң Зәйнәб апайҙың ауылға ҡайтҡыһы килеү хыялы ҡанатлана ла китә торғайны. Телефондан һөйләшеүҙәр ҙә, хаттар ҙа фәҡәт ауыл, өй-музей хаҡында барҙы. Ул Ғәзиз ағай үлгәндән һуң күңел төшөнкөлөгөн, ҡалала толҡа тапмауын, юғары даирәлә ижадының, үҙе әйтмешләй “тауҙай хеҙмәтенең” тейешле баһа ала алмауын ауылдағы өй тураһындағы хыял менән баҫты.

Ҡояш ҡалҡыу түгел, таңдар атһын,
Танһыҡтарым ҡанмай ҡайтмайым, —

тип, оҙон көйҙө ҡыҫҡартыбыраҡ, шаярта-көлдөрә йөрөнө тыуған яҡтарында.

Иртәгеһен КПСС-тың Күгәрсен район комитетында идеология буйынса секретарь Сулпан Абдулхаҡ улы Ғайсинда ҡабул итеүҙә булып, Зәйнәб апайға тыуған яҡтарында өй һалдырыу мәсьәләһен ныҡлап һөйләшеп, Өфөгә юл алдыҡ.

Тик ни сәбәптәндер өй һалыу мәсьәләһе урынынан ҡуҙғалманы. Ә Зәйнәб апай, фатирының иҙәне һыуыҡ булғанлыҡтан, даими аяҡтары өшөп йонсоғас, шул һөйләшеүҙән һуң күңеле менән йылы иҙәнле ауыл өйөндә “йәшәй башланы”. Берсә хыял, берсә күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙәр менән тулы хаттар яҙыла башланы.

Өфөлә Зәйнәб апайҙың фатиры беренсе ҡатта булды. Уландары иҙәнен аҡтартып, таҙарттырып, йылытып та маташты, иҙән йылынманы. Ҡояш та бик төшмәне фатир тәҙрәләренән. Шуға йәй көндәре лә һалҡынса булды. “Аяғыма быйма кейеп йөрөй алмайым бит инде өйҙә, ни эшләйем икән?” — тип аптырана торғайны. Командировкаларға барған саҡта йылы, яҡты ауыл өйҙәрен күрә лә, ауылға ҡайтҡыһы килеп ҡыҙыға ла китә торғайны. “Миңә бит бер ваҡытта ла матур, иркен, ҙур тәҙрәле, яҡты ауыл өйөндә йәшәргә тура килмәне. Шуға танһыҡлайым мин ундай тормошто”, — ти ине үҙе. Тик тағы тәрәндәнерәк уйлай ҙа: “Мин ҡартайыуға табан барам, кем ҡарар, өйҙө кем бағыр? — тип икеләнә. Шунан, — Бәлки, үҙем эш хаҡы билдәләп, түләп торһам, донъямды бағыусы булыр”, — тип, тағы ҡайтҡыһы килеү тойғоһо еңә башлай ине.

Ни генә тимә, Зәйнәб апай үҙе иҫән саҡта өй, артабан музей асҡысы тоттороу, ишектәрен шар асып ебәреп, әйҙүкләп өйөнә индереү, өҫтәлгә самауыр шажлатып ултыртып ҡуйыу, мейесенә ут яғып ебәреү, мейескә терәтеп кенә

боронғоса урындыҡ һалыу уны сикһеҙ бәхетле итер ине. Бөгөнгө көндә уның музейына ингән саҡта, бында бит Зәйнәб апайҙың эҙҙәре һаҡланған, ошонда ултырып эшләй торғайны, бында сәй эсте, тип иҫкә алам.

Ниндәй ҡәҙер күрһәтелде уға, шәреҡ ҡатын-ҡыҙ яҙыусылары араһында беренсе башлап трилогия яҙған, ҡатын-ҡыҙҙар араһында беренсе булып шиғри әҫәрҙәр йыйынтығы нәшер иткән, тәүгеләрҙән булып драма әҫәрҙәре яҙған ҡатын-ҡыҙ яҙыусыға? Биш йылда бер осрашыуҙарға килгән саҡтарында һыйлап, сувенир бүләктәр биреп ҡайтарыуымы уға күрһәтелгән иғтибар?

Архивын яйға һалырға берәй кеше билдәләгеҙ әле; йә Яҙыусылар союзынан, йә булмаһа, район етәкселегенән ярты йыл эшләрлек эш хаҡы түләп булмаймы? — тигән һорау менән мөрәжәғәт иттем. Булманы.

Шағир-ғалим Рәшит Шәкүр уның публицистик яҙмаларынан йыйынтыҡ туплап, редакторлап бирҙе. Зәйнәб апай ҡулъяҙманы Малеевка ижад йортона үҙе менән алып китте, һәм, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йыйынтыҡ унда юғалып ҡалды. Яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллина уға килгән йөҙәрләгән хаттарҙы рәткә килтереп, папкаларға туплап һалды. Яҙыусы Сәрүәр Сурина, шағирә Тамара Ғәниевалар йорт эштәрендә ярҙам иткеләп китә ине. Өфө ҡалаһы һыуы фенол менән ағыуланған осорҙа тотош ҡала халҡы шишмәләрҙән һыу ташыны. Йүгереп барып һыу килтереп китә торғайным. Бер көн килһәм, фляга менән һыу килтергәндәр. Зәйнәб апайҙың шатлығының сиге юҡ. “Ҡүгәрсен районы Бикес ауылынан икән — Әмир менән Әлфир Ишемғолов тигән егеттәр алып килде. Тағы алып килербеҙ, тинеләр. Һине башҡа яфаламам инде, һылыу. Үҙ балаларыңа ла кәрәк бит таҙа һыу”, — ти. Баҡсаһында Зөлфәр Хисмәтуллин умарталарын ҡараша, Александр Филиппов баҡса бағыу эштәрендә ярҙам иткеләй ине... Донъя мәшәҡәттәре һанап бөткөһөҙ. Ни өсөн ҡоласлыраҡ ярҙам күрһәтелмәне икән өлкән йәштәге апайыбыҙға? Был хаҡта мине Ауырғазы районында командировканан ҡайтҡан саҡта булған бер ваҡиға уйға һалды. Беҙҙе машина райондан Өфөгәсә алып килде. Оҙатып килеүсе иптәш:

— Ғәфү итегеҙ, беҙ Октябрь революцияһы урамы менән Цюрупа урамдары киҫешкән урындағы йортта туҡтап ҡына китәбеҙ ҙә, артабан һеҙҙе (беҙ яҙыусы Шакир Янбаев, шағир Риф Мифтахов инек) йәшәгән йорттарығыҙға тиклем оҙатып ҡуйырбыҙ. Оҙаҡламайбыҙ, — тине лә һүҙен дауам итте. — Бәхтиғәни Ғайсинға ит керетеп бирәбеҙ.

— Тыуған көнөмө әллә?

— Ул беҙҙең Ҡешәнне ауылынан бит. Яҡташыбыҙ. Беҙ уны иттән, балдан өҙмәйбеҙ. Үҙебеҙ сығарған көнбағыш майын да ярата. Бала саҡ еҫтәре сығып тора, ти. Яҡташтарҙы ҡарайбыҙ беҙ. Бөтөн районға бер нисәү генә бит улар...

Эй, рәхмәт яуғыры ауырғазылар! Ни тиклем оло изгелек эшләйһегеҙ. Ә Зәйнәб апайҙың апаһы Хафаса апай аҙна һайын ял көнө иртә менән Үҙәк баҙарға ит алырға сыға, сиратта тора...

Зәйнәб апайҙың ауылға ҡайтҡыһы килеү сәбәптәренең береһе, бәлки, ҡалала ризыҡ табыу мәшәҡәттәренән ҡотолоу, аҙыҡ-түлек мәсьәләһен хәл итеүҙе еңеләйтеү ҙә булғандыр. Он, май, шәкәр, сәй, хатта йәшелсә һатып алыу ҙа оло бер ҡыйынлыҡтар тыуҙырып, бөтөн нәмә лә ҡытлыҡҡа әйләнеп киткән замандарҙа төрлө уйҙар башына килгәндер инде...

*(Дауамы киләһе һанда)*